✓ *Мәҡсатығыҙҙы даими рәүештә күҙ алдығыҙҙа тотоп, уны теләк, дәрт менән, уның ысынбарлыҡ буласағына ныҡлы ышаныс менән нығытҡанда, бөтөн нәмәгә өлгәшергә мөмкин. Бер ҡасан да танауығыҙҙы төшөрөп, ҡулығыҙҙы һелтәп ҡуймағыҙ. Һеҙ - көслө характерлы һәм ҡаһарман кеше, бары тик көсһеҙҙәр генә "Тормош камиллығы һәм ныҡлы сәләмәтлек" тигән тауға үрләгәндә артҡа борола.*

Робин ШАРМА.

Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

8 - 14 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№36 (506)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Рәсәйҙә берҙән-бер!

4

Ниндәй тарих һөйләй…

сәнскәнташтар, әбейташтар йәки менгирҙар?

7

Замана етәксеһенең…

тормош ҡанундары

8-9

Халыҡ йыры ғына…

йырсыны йырсы итә

11

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Рәсәй Бөтә донъя сауҙа ойошмаһының (ВТО) рәсми ҡатнашыусыһы статусын алды. Был ойошмаға инеү беҙгә нимә бирәсәк?

Ирек ЯЛАЛОВ, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы: Бөтөн Рәсәй кимәленән ҡаланыҡына күсеп ҡарағанда, Өфө иҡтисады өсөн БДСО-ға инеү ҡайһы бер айырым хафаланыуҙар тыуҙыра, әлбиттә, ләкин улар күпселек осраҡта ғәмәли түгел, ә теоретик характерҙа, тип әйтергә кәрәк. Ә республика кимәленән сығып һүҙ йөрөткәндә, шуны әйтергә була: ауыл хужалығы өлкәһендә, мәҫәлән, төбәк ниндәйҙер үҙгәрештәр һиҙмәйәсәк тиерлек. Был ойошмаға инеү моторҙар төҙөү кеүек юғары технологиялы производство иҡтисадына ла зур йоғонто яһамаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең БДСО ағзаһы булыуы республикаға һәм тотош илгә сит ил тауарҙарының тиҙерәк үтеп инеүенә юл асасаҡ. Әлбиттә, БДСО-ға инеү эҙемтәләре хаҡында һөйләү иртәрәк әле. Тик нисек кенә булмаһын, иҡтисадтың хәле мөшкөлләнәсәк, тип көтөлмәй. Киреһенсә, халыҡ ыңғай яҡтарҙы күберәк күрәсәк, тигән фекерҙәмен. Мәҫәлән, ҡайһы бер тауарҙарға хаҡтарҙың төшөүе көтөлә. Ә республика тауар етештереүселәре иһә яңы шарттарҙа һөҙөмтәлерәк эшләй башлаясаҡ, тип уйлайым. Хәҙер беҙҙең сәнәғәттең үҫеш юлы берәү - ул сәнәғәтте донъя кимәле стандарттарына тиклем күтәреү.

Шәмсинур ШАКИРОВА, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ профессоры: Яңы иҡтисади шарттарҙа урындағы ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр дәүләт ярҙамынан тыш "йәшәй" алмаясаҡ. Ләкин БДСО-ға инеүҙең бер шарты булып ауыл хужалығын дәүләт тарафынан субсидиялауҙан баш тартыу тора. Ике йыл эсендә был өлкәне финанслау 35 миллиард һумдан 9 миллиард һумға тиклем ҡыҫҡарасаҡ, ә һуңынан бөтөнләй туҡтаясаҡ. Ғөмүмән, республика етештереүселәре БДСО-ға инеүҙе әллә ни хупламай. Атап әйткәндә, "Рощинский" совхозында конкуренттарҙың күпләп ағылыуын "эшһеҙ ҡалыу мөмкинлеге" булараҡ баһалайҙар.

(Дауамы 2-се биттә).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНДӘ…

тамашалар көтә

Өфөлә "Туғанлыҡ" V Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивале асылды. Унда Алтай, Ҡырғыҙстан, Хакасия, Ҡаҙағстан, Дағстан, Саха (Якутия), Төркиә, Әзербайжан, Ҡабарҙы-Балҡар, Татарстан, Сыуашстан, Башҡортостан, Ҡырым (Украина), Ғағауз (Молдова) республикаларынан килгән театр коллективтары 14 телдә сығыш яһаясаҡ. М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры был конкурсҡа Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһын тәҡдим итә.

РФ Мәҙәниәт министрлығы, ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы, РФ һәм БР Театрҙар эшмәкәрҙәре берлеге ярҙамында ойоштороған "Туғанлыҡ" төрки телле театрҙар фестивале юғары театр сәнғәтен, дөйөм тарихи һәм мәҙәни тамырҙарға нигеҙләнгән мөнәсәбәттәрҙе бөгөн дә һаҡлаған республикалар һәм илдәр өсөн оло байрам ул. Был фестиваль көндәлек тормошта үҙ-ара ижади тәжрибә менән уртаҡлашыу бәхетенә эйә булмаған театрҙарға бер майҙанда осрашырға, үҙҙәрен театр донъяһының бер өлөшө итеп тойорға, шулай уҡ ҡәрҙәш милләттәр араһында үҙеңдең мөһимлегеңде, кәрәклегеңде баһаларға мөмкинлек бирә.

Конкурс программаһынан тыш, баш ҡала тамашасыһы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, Милли йәштәр театры, Өфө "Нур" татар театры, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры, Салауат башҡорт драма театры, Сибай башҡорт драма театры, Туймазы татар драма театрының иң шәп спектаклдәрен ҡарай аласаҡ.

Шулай уҡ "Туғанлыҡ" фестивале сиктәрендә ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара ойошмаһы ил-ағзалары мәҙәниәт министрҙарының Даими Советының XXX ултырышы, билдәле ҡурайсы, йырсы, актер, педагог Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналы кисә, Төньяҡ Кавказ, Абхазия һәм Көньяҡ Осетия төбәге режиссерҙары лабораторияһы, халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үтәсәк.

✓ *БДСО беҙҙең етештереүселәргә һәм эшселәргә лә донъя баҙарына юл асасаҡ. Сит ил компанияларының килеүе күпләп эш урыны булдырыуға һәм шулай уҡ тауар һәм хеҙмәт баҙарында конкурентлыҡты арттырырға булышлыҡ итәсәк.*

БАШ ЙОРТТА...



БОРСОЛОУЫБЫҘ... буш урында килеп тыуманы

Баш ҡалабыҙ көндән-көн төҙөкләнә, үҫә, яңы торлаҡ йорттар, социаль-мәҙәни тәғәйенләнештәге биналар ҡалкып сыға. Быға, әлбиттә, ҡыуанырға ғына кәрәк: тимәк, кемдәрҙер фатирлы була, балалар баҡсаһы, мәктәп, магазин һәм башҡа уңайлыҡтар кешенең үҙ микрорайонына яҡыная.

Бер рәүҙәр быға, тәбиғи, шатлана, ә икенселәр өсөн бындай уңайлыҡтар, киреһенсә, уңайһыҙлыҡтар ғына килтереп тыуҙыра. Уның сәбәптәре иһә шунда: бындай биналарҙың ҡайһылары иҫке кварталдарҙағы былай ҙа бер-береһенең "үксәһенә баҫып" ултырған торлаҡ йорттар араһына ҡыҫып-ҡыҫтап килтереп һалына. Һөҙөмтәлә, микрорайонда "тын алырлыҡ "та форсат ҡалмай башлай.

Беренсенән, фәҡәт төҙөлөш маҡсатын ҡыуып, йыш ҡына Санитар һәм эпидемиологик ҡағиҙә һәм нормативтар һанға һуғылмай. Ә бит гигиена һәм янғын хәүефһеҙлеге талаптарына ярашлы, биналар бер-береһенән билдәле бер тәртиптә һәм аралыҡта урынлашырға, бер-береһенә ҡояш яҡтыһын ҡапламаҫҡа тейешле.

Икенсенән, билдәле бер радиуста йәшәүсе һәм хеҙмәтләндерелеүсе кешеләр һанының да сиктән ашып китмәүен даими күҙәтеү кәрәктер, моғайын. Шулай булмаһа, тиҙҙән күп ҡатлы йорттар янындағы балалар майҙансыҡтарын да баҫып алып, магазин йә шуның кеүек берәй сауҙа киоскыһы һалып ҡуймаҫтар, тимә!

Әйткәндәй, был буш урында килеп тыуған борсолоу түгел. Ышанмаһағыҙ, баш ҡаланың Сипайлово биҫтәһенә "экскурсияға" килеп сығығыҙ, шул саҡ нисек итеп торлаҡ йорттар араһына түләүле автостоянка ла, балалар баҡсаһы ла, "соцкультбыт" биналарын да ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйҙырырға мөмкин икәнлекте күрерһегеҙ. Был осраҡта һүҙ "безразмерный" тигән даны сыҡҡан әлеге ошо микрорайондың Максим Рыльский туҡталышынан Ҡариҙел йылғаһы үренә табан барған урындағы бер кварталы хаҡында ғына әле. Был тирәлә урам осона сыға алмай, адрес һорашып йөрөүселәр аҙым һайын осрай, сөнки арҡыс-торҡос ултырған йорттар араһында аҙашып китеүе бер ни тормай. Төҙөлөш бара, ярай, аңлашыла - кәрәк, тик бына аҙаҡ уның эргә-тирәһен төҙөкләндереү, юлдарға асфальт түшәү, ағастар ултыртыу кеүек эштәр ҙә онотолмаһын ине. Торлаҡ йорт тирәләрен ҡырмыҫҡа иләүеләй баҫып алған транспорт һөрөмө генә һулап йәшәмәһен халыҡ. Юғиһә, һуңғы тиҫтә йылда Сипайлово биҫтәһен төҙөкләндереү, йәшелләндереү эштәре бөтөнләй алып барылмай. Бөтә халыҡ та бит саф һауа еҫкәргә Ҡариҙел буйындағы таллыҡҡа төшөп ултыра алмай, был урын эскеселәр, берәҙәктәр һәм эшһеҙҙәрҙең яратҡан төйәгенә әйләнгән күптән...

Фирүзә ИШБИРҘИНА,
пенсионер.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Рәсәй Бөтә донъя сауҙа ойошмаһының (ВТО) рәсми ҡатнашыусыһы статусын алды. Был ойошмаға инеү безгә нимә бирәсәк?

(Башы 1-се биттә).

Александр ВАСИЛЬЕВ, Башҡортостандың иҡтисад үҫеше министры урынбаҫары: Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына ингәндән һуң Рәсәйҙең тышҡы иҡтисади эшмәкәрлеге тотороклораҡ буласаҡ. Шулай уҡ был аҙым Рәсәйгә сит ил инвесторҙарының күпләп килеүенә килтерәсәк, тип ышанырға була, ә был үҙ сиратында илдең иҡтисади үҫешенә яңы импульс бирәсәк. Шулай уҡ БДСО беҙҙең етештереүселәргә һәм эшселәргә лә донъя баҙарына юл асасаҡ. Сит ил компанияларының килеүе күпләп эш урыны булдырыуға һәм шулай уҡ тауар һәм хеҙмәт баҙарында конкурентлыҡты арттырырға булышлыҡ итәсәк, ә был иһә тотош илдең иҡтисадына яңы һулыш өрәсәк.

Шул уҡ ваҡытта иҡтисадтың ҡайһы бер өлкәләре хәүеф аҫтына эләгергә лә мөмкин. Ғәҙәттә, БДСО-ға инеүсе барлыҡ илдәрҙең дә еңел һәм туҡыу сәнәғәте, ауыл хужалығы, машиналар төҙөү сәнәғәтенең ҡайһы бер өлкәләре һәм ҡайһылыр осраҡта улар менән сиктәш өлкәләр зыян күрә. Нәҡ ошо өлкәләрҙә, баҙарҙа әҙер сит ил тауарҙары күбәйеүе һөҙөмтәһендә, етештереүҙең кәмеүе һәм эш урындарының ҡыҫҡарыуы күҙәтелә. Ләкин Рәсәйҙә үткәрелгән ирекле тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай эҙемтәләр булған осраҡта ла улар айырым өлкәгә түгел, ә етештергән тауары конкурентлыҡ буйынса һынауҙы үтә алмаған аныҡ предприятиеларға ҡағыласаҡ.

Нисек кенә булмаһын, БДСО-ға инеүҙән тиҙ һөҙөмтә көтөргә ярамай. Ғөмүмән, тәүге йылдарҙа бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр булмаясаҡ, тип уйлайым. Ә төбәк иҡтисадына, тәбиғи, был ойошма структураһында эшләүгә бер аҙ күнегергә, уның алгоритмын аңларға кәрәк буласаҡ.

Мәхмүт ХУЖИН, журналист: Сит илдәрҙән тауар индереүҙең артыуы арҡаһында, тәү сиратта, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәр һәм машина эшләүселәр зыян күрәсәк, тип фаразлай белгестәр. Ысынлап та, ауыл хужалығы өсөн БДСО-ғы ағзалыҡ кире йоғонто яһаясағын асыҡ төҫмөрләргә була. Мәҫәлән, 2020 йылға тиклем тармаҡты үҫтереү буйынса ҡаралған дәүләт ярҙамының, ошо ойошма талаптарын күҙ уңында тотоп, 1 триллион һумға кәметелеүе быны асыҡ дәлилләй, минеңсә. Ә шул уҡ ваҡытта беҙҙең аграрийҙар етештергән тауарҙың сифаты сит илдекенә ҡарағанда күпкә һәйбәтерәк булыуын берәү ҙә инҡар итмәҫ, моғайын. Әммә иҡтисади-сәнәғәт капиталының унда ҡайғыһы юҡ. Улар күптән инде ауыл хужалығының зыян килтереп эшләгән тармаҡ икәнлеген таныуын йәшермәй һәм башҡаларҙы ла шуға ышандырырға тырыша.

БДСО-ға инеү таможня, һалым, эшҡыуарлыҡ, иҫәп-хисап кеүек тармаҡтарҙа тәртип булдырырға ярҙам итәсәк, тигән фекер белдереүселәр бар. Ләкин быға ышанып булмай, сөнки ҡамсы йәки күҫәк менән тәртип урынлаштырыу мөмкин түгел. Тәртип кешенең тәбиғәтендә булырға тейеш.

Ниндәйҙер ойошмала тороуҙың файҙаһы барлыҡ ағзаларҙың да тиң булыуына бәйле. Ә донъя баҙарында бары тик яғылыҡ-энергетика байлыҡтары менән генә һатыу иткән, социаль сәйәсәт ғәҙәл атҡарылмаған Рәсәйҙең бер-нисә быуат капиталистик йәмғиәттә йәшәгән Европа илдәре, Америка дәүләте янында тиң хоҡуҡлыҡ менән файҙалана аласағына шикләнәм.

Гөлназ САФУАНОВА
әҙерләне.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҚЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороклоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.

- Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була**. Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыға - "Айыҡ туй сценарийҙары", 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.
- Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, беҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.
- **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ 5-9 сентябрҙә Башҡортостанда Швеция Короллеге көндәре үтте. Унда ҡатнашыу өсөн Өфөгә ҙур делегация килде, уның составына Илселек хеҙмәткәрҙәре, Швецияның алдынғы компаниялары вәкилдәре, мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәре инде. Сараны Швецияның Рәсәйҙәге Илселеге, Швеция сауҙа советы, Башҡортостан Хөкүмәте һәм Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ойоштороҙо. Швеция көндәре республикала тәүгә үтте. Башҡортостан һәм Швеция компаниялары араһында эшлекле бәйләнештәр булдырыу, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәләрендә хеҙмәттәшлекте киңәйтеү, Швецияның иҡтисад, мәҙәниәт, сәнғәт, мәғариф һәм туризм өлкәләрендәге ҡаҙаныштары менән танышыу сараның төп маҡсаты булып торҙо.

✓ Рәсәй йыйылма командаһы спортсылары Алексей Лабзин һәм Андрей Коптев (Башҡортостан физик культура институты), шулай уҡ Евгений Кегелев һәм Федор Триколач Лондонда 2012 йылғы Паралимпия уйындарында Т11/13 категорияларында 4х100 метрлыҡ дистанцияла йүгереү буйынса чемпиондар булды. Шулай итеп, Коптев менән Лабзин Башҡортостандың "алтын запасын" ун миҙалға еткерҙе: йөҙөүселәр Оксана Савченко - 4 миҙал, Александр Неволин-Светов - ике, еңел атлеттар Алексей Лабзин - ике, Елена Паутова, Андрей Коптев һәм Анастасия Овсянникова - берәр алтын миҙал яуланы. Бынан тыш, Неволин-Световта - ике, Анна Сорокинала бер "көмөш" бар. Йәмғеһе - 13 миҙал. Пекинда үткән Паралимпия уйындарында улар туғыҙ ине.

✓ Республика Хөкүмәте менән әҙерләнгән "Башҡортостан Республикаһында ҡулланыу кәрзинен һәм йәшәү минимумын билдәләү тәртибе тураһында"ғы БР законының 4-се статьяһына үҙгәрештәр индереү хаҡында"ғы закон проекты тәҡдим ителде. Федераль ҡануниәткә ярашлы, социаль өҫтәмә йәшәү минимумынан кәмерәк пенсия алғандарға билдәләнә. 2012 йылда республикала пенсионерҙың йәшәү минимумы 5220 һум күләмендә билдәләнде. Был сумманан кәмерәк пенсия алған кешеләргә өҫтәмә федераль бюджеттан түләнә. 2012 йылдың 1 августына ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, федераль бюджеттан бындай түләүҙәрҙе Башҡортостанда 100 836 кеше ала. Башҡортостанда пенсионерҙың 2013 йылға йәшәү минимумы 5690 һум күләмендә билдәләнә.

✓ *Был осраҡта кешенең хеҙмәткә мөнәсәбәте генә түгел, ғөмүмән, уның ниндәй сифаттарға эйә булыуы, ниндәй кеше икәнлеге нисек ашауына ҡарап билдәләнгән.*

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

АШАҒАНДА ҠОЛАҒЫҢ ҺЕЛКЕНҺЕН,

эшләгәндә йөрәгең елкенһен…

Туҡланыу, аш-һыу, һый-хөрмәт, ризыҡ хаҡында халыҡ мәҡәл-әйтемдәре бихисап. Уларҙың бер нисәүһе: "Ас кешенең асыуы яман", "Аслыҡ бүрене урмандан сығара", "Аш - ашҡа, урыны - башҡа", "Аш ҡәҙерен ас белер, тун ҡәҙерен яланғас белер", "Аш эйәһе менән татлы", "Аштан оло булма", "Байрам ашы - ҡара ҡаршы", "Бәндәне ризыҡ йөрөтә", "Бәхетленең ҡунағы бергә", "Кемдең ҡулында - шуның ауыҙында", "Күңел етһә, аш етә", "Танһыҡҡа - тары бутҡаһы", "Тәмле нәмә күп булмай", "Бирмәҫтең ашы бешмәҫ", "Ямандан ярты ҡалаҡ аш ҡалған", "Бар сағында - бүреләй, юҡ сағында - сүреләй", "Итле өйҙә ике кис, өйрәлелә бер кис", "Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ", "Хәлең нисек? Ашауға ҡарап" һ.б. Ғөмүмән, ашауға бәйле мәҡәл-әйтемдәр шул тиклем күп һәм төрлө йүнәлешле, уларҙы теҙеп яҙып сығыу өсөн генә лә үҙенә айырым бер гәзит бите етмәҫ ине. Уларҙың байтағында ризыҡҡа, туҡланыуға мөнәсәбәт кенә түгел, тормош фәлсәфәһе лә берҙәй үк сағылыш тапҡан. Барыһының араһында "Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен" тигәне айырым иғтибарға лайыҡтыр.

Атайым һөйләүенсә, әүәле байҙар үҙҙәренә хеҙмәтсе, ялсы һайлап алғанда иң тәүҙә уларҙы ашатып ҡарар булған. Әгәр ҙә хеҙмәтселеккә дәғүә итеүсе рәтен белеп, ҡабаланмайынса, ҡапҡанын ҡайырып тешләп, яҡшы итеп сәйнәп ашаһа, уға ҡарап: "Был умырып ҡаба, рәтен белеп ашай, ашауына ҡарағанда, эш рәтен белгән, емертеп эшләрлек кешегә оҡшаған, оҡшай, алам", - тигән баһа бирелгән. Ә инде ризыҡҡа тейенеүсе семсенеп кенә, ырая ғына ҡапһа, ризыҡты үҙ итмәй, уны яртылаш ҡына ашаһа йә ҡабаланып-ҡарһаланып, ҡапҡанын сәйнәмәйенсә, эре-торо йотһа, уға ҡарап: "Ашауының рәте юҡ, эшкә лә барымы шулайҙыр инде, эш мәнеһе белмәгән кешегә оҡшаған",- тип, ундай кешене хеҙмәтселеккә алмаҫҡа тырышҡандар. Ҡыҫҡаһы, был осраҡта кешенең хеҙмәткә мөнәсәбәте генә түгел, ғөмүмән, уның ниндәй сифаттарға эйә булыуы, ниндәй кеше икәнлеге нисек ашауына ҡарап билдәләнгән. Ысынлап та, кеше һүҙ менән йәки нимәнелер махсус рәүештә тырышып эшләп күрһәтеп, үҙе хаҡында дөрөҫ булмаған ҡараш та тыуҙырыуы бар, әммә инде ашаған саҡта улай ҡыланып булмайҙыр ул. Унда һинең асылың бермә-бер сағыла. Кеше ризыҡҡа нисек тотонһа, эшкә лә шулай тотона. Әйтәйек, был йәһәттән минең бер етешһеҙлегем бар. Табын бүлешеүселәр һәр ваҡыт шәп, ҡабалан ашауыма иғтибар итә. Махсус рәүештә үҙемде контролдә тотоп, яйлап ашарға тырышып ҡарайым, әлегә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшә алғаным юҡ. Шул хаҡта уйланып ултырып, яйлап ашарға тырышып ҡараһам, ризыҡты тәмен татып ҡабул итмәгән кеүекмен. Дөрөҫөн әйткәндә, тормошта тап шул сифатым арҡаһында күп тапҡырҙар "янғаным" бар. Йәғни, ниндәйҙер ҡараҙы ашығыс ҡабул итеүем арҡаһында күп тапҡырҙар хаталанғаным, бинаҳаҡҡа кешеләрҙе рәнйеткәнем булды. Әммә һаман да бер һорауға яуап таба алмайым: миңә бындай етешһеҙлегемдән ҡотолор өсөн иң тәүҙә дөрөҫ итеп ашарға өйрәнергә кәрәкме, әллә дөрөҫ итеп ашарға өйрәнер өсөн ете үлсәп, бер ҡат киҫеп өйрәнергәме? Был халәтем теге кәзә, кәбеҫтә һәм бүре хаҡындағы лаҡап-йомаҡты хәтерләтә, йәғни иң тәүҙә кәбеҫтәне арыяҡҡа алып сығыр инең, бүре - кәзәне, бүрене алып сығыр инең, кәзә кәбеҫтәне ашай.

"Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен" тигән әйтемде тап ошо юғарыла килтерелгән миҫалдарҙан сығып та аңлатырға булыр ине. Әммә ошо әйтемдең "ҡолағың һелкенһен", "йөрәгең елкенһен" тигән һүҙбәйләнештәре дөрөҫ туҡланыуға бәйле тағы башҡа күренештәр хаҡында ла уйланырға мәжбүр итә. Шул хаҡта фекер йөрөтәйек.

Беҙ бала саҡта ауылдарҙа туҙҙан һағыҙ ҡайнатыусы инәйҙәр, апайҙар күп була торғайны. Беҙ, хәҙерге балалар шапылдатып сит ил һағыҙы сәйнәгән кеүек, үҙебеҙҙең урмандарҙа үҫкән ҡайындарҙың туҙынан ҡайнатылған ҡап-ҡара һағыҙҙарҙы сортолдатып сәйнәнек. Шапылдау менән сортолдау араһындағы айырманы һиҙәһегеҙме? Ҡайһыһы ләззәтлерәк? Ниндәй һағыҙ тәмлерәк? Әлбиттә, ҡайын туҙыныҡы. Хатта ҡарағай сайырын да, ололар кәшмәк, ағас мискәләр ямаған ыҫмаланы ла самалап ҡараған булды. Әммә инәйҙәр һәм апайҙар һәр ваҡыт туҙҙан ҡайнатылған һағыҙҙы өҫтөн күреп, уның әллә күпме ауырыуҙан арындырыр файҙаһы барлығын әйтә торғайны. Әйтәйек, һағыҙ сәйнәгән кешенең тештәре, теш ҡаҙнаһы ныҡ була, ул ашҡаҙанды шәп эшләтә, һағыҙҙы шулай уҡ йөрәк, баш ауыртҡанда сәйнәйҙәр, һағыҙ бөйөрҙө һәм бауырҙы таҙарта, башты шәп эшләтә, матдәләр алмашынуын яҡшырта, нервыларҙы тынысландыра, организмдан токсиндарҙы һәм шлактарҙы сығара, ҡатыуҙы бөтөрә, ҡан баҫымын нормалләштерә һ.б. Тағы ла, йәнәһе, һағыҙ сәйнәгән кеше эшкә шәп була, йәғни ул ауыҙында һағыҙы булғанға күрә ләпелдәп, хәбәргә әүрәй алмай, эш менән генә булыша ала. Әммә һағыҙ сәйнәүҙе көнбағыш ярыу кеүек үк, бушты бушҡа ауҙарыуға, эт һуғарыуға, түбәгә төкөрөп ятыуға, ялҡаулыҡҡа тиңләү ҙә бар халыҡта. Күреүебеҙсә, һағыҙ сәйнәүгә ҡараш тик бер төрлө генә түгел.

Үҙә төшкәс, инәйҙәрҙең һәм апайҙарҙың һүҙҙәре иҫкә төшөп, һағыҙҙың кешеләге теге йәки был ауырыуҙы, сирҙе ни рәүешле бөтөрөүе, уның кеше организмына тәьсире хаҡында ҡыҙыҡһына башланым. Әммә күпме генә соҡсонһам да, уның составында кешенең һаулығы өсөн мөғжизә булырлыҡ, зәмзәм һыуы, тереһыу кеүек шифалы элексир ролен үтәрлек элементтарҙы тапманым. Һағыҙҙың составындағы иң файҙалы элемент - ул май, сөнки уны ҡайнатҡан саҡта һыйыр һөтөнән яһалған май ҡушалар. Бары шул ғына. Сәйнәргә яраҡлы ылыҫлы ағастар сайырында файҙалы элементтар бар барлыҡҡа, әммә бында һүҙ традицион ҡайын туҙынан ҡайнатылған һағыҙ тураһында бара. Әммә кешене етмеш төрлө ауырыуҙан дауалаусы был хикмәтле һағыҙҙың (ҡыҙым Тамсы һағыҙҙы "сәйнәк" тип атай) һаулыҡҡа файҙалы булыуын нисек аңлатырға була һуң?

Интернеттан һәм башҡа сығанаҡтарҙан эҙләнә-соҡсона торғас, тәки таптым бының серен. Баҡтиһәң, һағыҙ сәйнәү, шул уҡ ҡолағыңды һелкетеп ашаған, йөрәгеңде елкетеп эшләгән һымаҡ, кеше организмының, уның үҙәк нервылар системаһының, баш мейеһенең, ҡан әйләнешенең ыңғай эшмәкәрлеген тәьмин итеүсе гимнастика төрө генә икән. Уны хатта спортҡа ла тиңләргә була.

Әхмәр ҒУМӘР-ҮТӘБАЙ.
(Аҙағы киләһе һанда).

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө менән Төркиәнең Эскишехир ҡалаһы араһында хеҙмәттәшлек булдырыла. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Эскишехир ҡалаһы губернаторы, ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының Төркиә делегацияһы вәкиле Ҡадир Кочдемир менән эш осрашыуы үткәрҙе. Осрашыу барышында Өфө һәм Эскишехир ҡалалары араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү юлдары тикшерелде. Эскишехир - Төркиә Республикаһының ҙур сәнәғәт үҙәге. Бында машиналар эшләү, аҙыҡ-түлек, текстиль, цемент, ағас эшкәртеү сәнәғәте бар. Был ҡала шулай уҡ Төркиәнең мөһим транспорт үҙәге булып тора.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар тапшырыу буйынса комиссия тәҡдим ителгән эштәрҙе ҡарап, түбәндәге туғыҙ журналисты конкурста ҡатнашыуға тәҡдим итте: Зөһрә Арсаева, Альбина Гөбәйҙуллина, Андрей Линдер, Даян Мәжитов, Мәүлиә Рәхимова, Рәзифә Сәхәпова, Илдус Тимерханов, Зөфәр Толомғужин, Мәхмүт Хужин, Дамир Шәрәфетдинов. Комиссия йәмәғәт ойошмаларын, хеҙмәт коллективтарын дәғүәселәрҙең эштәре буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашырға саҡыра. Материалдарҙы 1 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 10-сы ҡат, 1007-се офис (йәки 4 ҡат, 414-се бүлмә) адресы буйынса Башҡортостан Журналистар союзына ебәрергә кәрәк.

✓Октябрҙә Башҡортостанда ике республика байрамы билдәләнә: 11 октябрҙә - Республика көнө һәм 25 октябрҙә - Ҡорбан байрамы. Улар төбәктә байрам көндәре тип иғлан ителде. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан асыҡлауҙарынса, 2012 йылда был байрамдар кесе йома көнөнә тура килә. РФ Хеҙмәт кодексына ярашлы, шаршамбы көндәрендә, 10 һәм 24 октябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла. Йыллыҡ төп һәм йыллыҡ өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә ял һәм байрам көндәре отпускының календарь көндәренә индерелмәй.

✓Ноябрҙә Башҡортостан халҡын йәнә өс байрам көнө көтә - 3-5 ноябрь. 2012 йылда 4 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнө йәкшәмбегә тура килә. Ял һәм эшләмәгән байрам көндәре тура килгәндә ял көнө байрамдан һуңғы эш көнөнә күсерелә. Тимәк, ял көнө йәкшәмбе 4 ноябрҙән дүшәмбе 5 ноябргә күсерелә. Ә бына Яңы йыл каникулдары кәм тигәндә 8 көн - 1 ғинуарҙан 8-енә тиклем дауам итәсәк.

"Башинформ"дан.

✓ *Дим, Ленин районында мәҙәниәт, йәштәр эштәре бүлегенә ҡараған учреждениеларҙа башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәр юҡ тиерлек. Һөҙөмтәлә ундағы мәғлүмәт стендтарын тик рус телендә генә уҡырға мөмкин.*

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ЛЕНИН УРАМЫ...
автобустарға ике яҡлы

Ленин урамындағы юлда автобустар өсөн махсус һыҙат барлыҡҡа килде. Был һыҙат "А" хәрефе менән билдәләнгән һәм Революцион урамынан алып Пушкин урамына тиклем дауам итә. Пушкин урамы яғынан хәрәкәт итеү өсөн өс һыҙат ҡалдырылған.

Ленин урамы бер яҡлы итеп бер йыл элек үҙгәртелгәйне. Ҡала власы ошо рәүешле тығындар проблемаһын хәл итергә тырышты, ләкин ниәт маҡсатына өлгәшмәне, сөнки, беренсенән, халыҡ өсөн мөһим булған күп тукталыштар юҡҡа сыҡты, икенсенән, урамдың ике яғында ла парковкаға ҡуйылған автомобилдәр хәрәкәт өсөн ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы.

Яңы һыҙаттан һигеҙ маршрут буйынса тик "Нефаз" автобустары ғына йөрөйәсәк, тип билдәләнһә лә, шәхси автобус хужалары бының менән килешмәй. Бөгөнгө көндә хәрәкәт бер яҡлы итеп үҙгәртелгәнгә тиклем йөрөгән шәхси автобус маршруттары ла махсус һыҙат буйынса хәрәкәт итә башлаған. Ҡайһы саҡта автобустар артынан шәхси автомобилдәр төшөп алғанын да күҙәткеләргә тура килә. Уларға, күрәһең, автобус өсөн тәғәйенләнгән юлдан барған өсөн тәғәйенләнгән1500 һум күләмендәге штраф ҡурҡыныс түгел. Шулай уҡ был һыҙат буйынса йөрөгән автобус водителенә лә ҡаршы юлға сыҡҡан өсөн 5 мең һумға тиклем штраф йәки 4-6 айға тиклем водитель танытмаһынан мәхрүм итеү ҡаралған.

СИРАТҠА БАҪ,
киләһе йыл ял итерһең

Республикала социаль путевкалар өсөн сират йылдарға һуҙыласаҡ әле. Әлеге ваҡытта алты мең урынға бер-нисә тиҫтә мең кеше дәғүә итә.

Социаль туризм буйынса программа республикала икенсе йыл рәттән эшләй. Ағымдағы йылда хаҡлы ялда булғандарҙан һәм ғәриптәрҙән ғаризалар алыу июль айында башланды һәм декабрь аҙағына тиклем дауам итәсәк. Ошо ваҡыт арауығында бихисап кеше ғариза тапшырған. Ләкин уларҙың быйыл ял итеү мөмкинлеге шикле, сөнки әлегә тиклем былтыр сиратҡа баҫыусылар өсөн путевкалар бүленә. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының Киров районы буйынса ғына ла арзан хаҡҡа ял итергә теләүселәр тарафынан бирелгән ғаризалар һаны бөгөнгө көнгә өс меңдән артып киткән, ә быйылғы ял өсөн бүленгән путевкалар һаны иһә 241 генә.

2012 йылда программаға 111 миллион һум аҡса бүленгән. "Быйыл был программала ҡатнашырға теләүселәр бик күп. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, барыһына ла льготалы путевка бүлеү өсөн аҡса етмәйәсәк. Тик нисек кенә булмаһын, сират һаҡланасаҡ һәм быйыл ял итә алмағандар был мөмкинлекте икенсе йылда аласаҡ", тип белдерә хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.

АФАРИН!

РӘСӘЙҘӘ БЕРҘӘН-БЕР!

Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Рәсәйҙә тәүге ТӨРКСОЙ кафедраһы асыу тураһында ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйылды.

Кафедраны асыу идеяһын юғары уҡыу йортоноң ректоры Раил Әсәҙуллин тәҡдим итә һәм быйыл йәйгеһен республикала эш сәфәре менән булғанда Халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәре ойошмаһы генераль секретары Дюсен Касеинов БДПУ менән танышҡандан һуң, ризалығын белдерә. Сөнки уҡыу йортонда бының өсөн ныҡлы нигеҙ ҙә, тупланған бай тәжрибә лә күҙгә күренеп тора. Әлеге ваҡытта унда Израиль мәҙәниәте тарихы үҙәге, И. Гете исемендәге, франкофония, К. Дмитриев, М. Аҡмулла, татар теле, иран мәҙәниәте кабинеттары уңышлы эшләп килә. Тимәк, уҡыу йорто махсус ғилми-мәғрифәт үҙәктәре, мәғлүмәт үҙәге булдырып, халыҡ-ара һәм милләт-ара бәйләнештәрҙе үҫтереү юлынан маҡсатлы бара, тип раҫларға мөмкин. Яңы асылған ТӨРКСОЙ кафедраһы эшмәкәрлегенең дә төп йүнәлеше төрки телле халыҡтарҙың рухи ҡиммәттәрен өйрәнеү, һаҡлау йүнәлешендәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу, халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереүҙе үҙ эсенә аласаҡ.

ТӨРКСОЙ-ҙың Даими советының сираттағы, 30-сы ултырышына йыйылған ағза-илдәр һәм күҙәтеүсе-илдәрҙең мәҙәниәт министрҙары был көндө башҡорт халҡының йыр-моңо, бейеүҙәре менән генә танышып ҡалманы, ә йыйын-һабантуй күренештәренә лә шаһит булды, уҡыу йортоноң художество-графика факультеты студенттарының кейеҙҙән тегелгән кейем өлгөләре менән танышты, ысын кейеҙ тирмәлә ҡымыҙ менән һыуһынын ҡандырҙы. Уҡыу йорто буйлап яһалған экскурсияла Мәғлүмәт-мәғрифәт үҙәгендә Таулы Алтай һәм Яҡутстан Республикалары юғары уҡыу йорттары студенттары менән он-лайн аралашыу булды.

М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла ТӨРКСОЙ кафедраһы асылыуы уңайынан ойоштороған түңәрәк ҡорҙа яңы кафедраның ниндәй йүнәлештә эшләргә тейешлеге тураһындағы фекер алышыу менән бер рәттән, Дюсен Касеинов кафедраға ойошманың флагын һәм эмблемаһын, кафедраның асылыуын раҫлаусы таныҡлыҡ та тапшырҙы. Ә инде уҡыу йортоноң ғалимдар советы ҡарары менән Дюсен Касеиновҡа вуздың почетлы профессоры тигән маҡтаулы исем биреү уға яңы бурыстар ҙа йөкмәтте. Иң мөһиме - яңы профессорлы яңы асылған кафедра ТӨРКСОЙ-ҙың даими иғтибарынан һәм ярҙамынан бер ваҡытта ла ситтә ҡалмаҫына ышаныс бар.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

ХАКИМИӘТТӘРҘӘ ЛӘ...
телде өйрәнәләр

Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законды ғәмәлгә ашырыу маҡсатында ойоштороған "Хатаһыҙ ҡала" конкурсының йомғаҡтары барланды, еңеүселәр билдәләнде. Сарала Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре, БДПУ, БДУ уҡытыусылары, Өфө райондары хакимиәттәре етәкселәре ҡатнашты.

Конкурс барышында 9 жюри төркөмө булдырылды. Унда Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы терминология комиссияһы ағзалары, филологтар, тел белгестәре йәлеп ителде. Жюри ағзалары закон үтәлешен баһалап, Өфөнөң мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт учреждениеларын, торлаҡ-коммуналь хужалығы, сауҙа, реклама һәм хеҙмәтләндереү, сәнәғәт, иҡтисад, транспорт, төҙөлөш һәм архитектура өлкәләренә ҡараған предприятие-ойошмаларҙы тикшереп сыҡты.

Ҡала округы хакимиәтенең гуманитар мәсьәләләр бүлеге начальнигы Зөлфиә Ханнанова билдәләүенсә, Октябрь районында быйыл урындағы комиссия тарафынан хакимиәт хеҙмәткәрҙәре өсөн башҡорт телен өйрәнеү курстары ойоштороған. Унда икенсе дәүләт телен хәҙер 50-нән ашыу кеше өйрәнә. Ғөмүмән, "Хатаһыҙ ҡала" конкурсы сиктәрендә район хакимиәттәрендә башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәрҙең һанына ла әһәмиәт бирелә. Был йәһәттән Октябрь районы беренселекте биләп тора. Киров, Совет районы хакимиәттәрендә яҡынса 30 кеше башҡорт телен белә. Ә бына Дим районында ни бары - 5 хеҙмәткәр.

Бөтә район хакимиәттәрендә эш компьютерҙарына башҡорт шрифты ҡуйылған. Әммә етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. З. Ханнанова әйтеүенсә, хакимиәт эсендәге алтаҡталарҙың ҡайһылары хаталы яҙылған. Бигерәк тә Орджоникидзе һәм Дим районы хакимиәттәре был хаталар буйынса айырылып тора. Иҫкәртеүҙәр яһалғандан һуң Дим районы етәкселеге хаталы яҙыуҙарҙы тулыһынса төҙәткән, Орджоникидзе районы хакимиәтендә был эш аҙағынаса еткерелмәгән әле. Йыл башында ҡалалағы алтаҡталарҙы хатаһыҙ яҙыуға йәмәғәтселек иғтибарын йәлеп итеү өсөн Өфө райондары төрлө акциялар ойошторорға тейеш ине. Был юҫыҡта Киров районы ғына көс һалған. Уның тарафынан БДПУ студенттары ҡатнашлығында "Хатаһыҙ ҡалаға - йәштәр" акцияһы үткәрелгән.

Филология фәндәре кандидаты, БДПУ доценты Эльвира Рәхимова Киров районындағы спорт клубтарының күбеһендә башҡорт теленә эйә булған белгестәр эшләүен билдәләне. Шуға күрә ундай клубтарҙа стендтарҙың, алтаҡталарҙың ике дәүләт телендә лә хатаһыҙ булыуы ғәжәп түгел. Ә бына Дим, Ленин районында мәҙәниәт, йәштәр эштәре бүлегенә ҡараған учреждениеларҙа башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәр юҡ тиерлек. Һөҙөмтәлә ундағы мәғлүмәт стендтарын тик рус телендә генә уҡырға мөмкин. Ҡалала шулай уҡ мәҙәниәт, йәштәр эштәре буйынса учреждениеларҙа хаталар осрай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

"Хатаһыҙ ҡала" конкурсы йомғаҡтары буйынса Октябрь районы еңеүсе булып сыҡты. Икенсе, өсөнсө урындарға Киров һәм Совет райондары лайыҡ булды. Район хакимиәттәренең барыһына ла аҡсалата призҙар тапшырылды.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Сода" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең Директорҙар советы ултырышы үтте, унда Директорҙар советы рәйесе вазифаһына Рәсәй һәм Беларусь Республикаһы союздаш дәүләтенең Дәүләт секретары Григорий Рапота бер тауыштан һайланды. Бындай ҡарар Беларусь Республикаһының әлеге ваҡытта кальцийлы сода етештереү буйынса завод төҙөү проектын тормошҡа ашыра башлауы менән бәйле. Проект 2012 йылдың 14 июнендә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың Беларусь Республикаһына визиты барышында тикшерелде. Был пландар ике яҡлы партнерлыҡ сиктәрендә тормошҡа ашырыласаҡ, уның эшмәкәрлеген координациялау союздаш дәүләт секретары Григорий Рапотаға йөкмәтелгән. "Сода" компанияһы - Рәсәйҙең ҙур акционерҙар йәмғиәте. Башҡортостан Республикаһы төп акционер булып тора, ул "Сода" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендәге акциялар пакетының 61,65 процентына эйә.

✓Өфөлә йәнә бер балалар баҡсаһы сафҡа индерелде. 105-се "Теремок" балалар баҡсаһын асыу тантанаһы баш ҡаланың Совет районында үтте. 2012 йылда Өфөлә йәмғеһе өс балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылды. Йәнә 10 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһын төҙөү планлаштырыла. 2011 йылда республиканың баш ҡалаһында туғыҙ балалар баҡсаһы асылғайны. Өфө хакимиәте округы башлығы Ирек Ялалов фекеренсә, бындай төҙөлөш темптары һаҡланһа, алдағы дүрт-биш йылда ҡалала балалар баҡсаларына сираттар мәсьәләһен хәл итеп буласаҡ.

✓Өфө биләмәһен санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡҡа әүҙем әҙерлек бара. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ул баш ҡалала 10 сентябрҙән 10 октябргә тиклем дауам итәсәк. Иғлан ителгән айлыҡ сиктәрендә 29 сентябрҙә дөйөм ҡала өмәһе үтә. Экологик айлыҡ дауамында Өфө предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәре территорияларҙы сүп-сарҙан таҙартасаҡ, фасад һәм ҡоймаларҙы ремонтлаясаҡ. Бынан тыш, 30 көн дауамында республиканың баш ҡалаһында юлдарҙы, шулай уҡ квартал-ара юлдарҙы һәм тротуарҙарҙы ремонтлау буйынса эштәр тамамланырға тейеш.

✓1 сентябрҙә баш ҡаланың Дим районында өс ҡатлы яңы мәктәп асылды. Ул 620 баланы ҡабул итте. Мәктәпте асыу тантанаһында республика Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

Белем көнөндә 165 уҡыусы Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты ишектәрен тәүге тапҡыр асып инде. Башҡортостан райондарынан тыш, гимназияның 8-се, 9-сы синыфтарына биш Рәсәй өлкәһенән балалар ҡабул ителде.

ШАРТТАР БАР,

уҡы ла уҡы!

"Конкурс ҙур булды. Ҡабул итеү имтихандарына меңдән ашыу бала килгәйне. Бер урынға ете уҡыусы дәғүә итте, - ти гимназия директоры Әлфир Ғайсин. - Уҡыусылар имтихандарҙы юғары кимәлдә тапшырҙы. Беҙҙә көслө балалар белем аласаҡ, тип әйтә алам".

Тантаналы сарала сығыш яһап, гимназияның сығарылыш уҡыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Рәсимә Ураҡсина был уҡыу йортон белем Мәккәһенә тиңләне. "Талантлы балалар күп, - тине ул, - әммә тап ошо мәктәптә бигерәк тә аҡыллы, бигерәк тә ҙур киләсәккә эйә булырҙай, милләтебеҙҙең ҡотон тотоп торорҙай ҡыҙҙар-малайҙар уҡый. Бында беҙҙең өмөтөбөҙ, ышанысыбыҙ, хазинабыҙ тупланған". Гимназияла, ысынлап та, юғары кимәлдә белем алыу өсөн барлыҡ шарттар булдырылған. Мәғариф өлкәһендәге оптималләштереү кеүек үҙгәрештәрҙең "осло мөйөштәрен" урап үтеп, уҡыу йорто үҙ йүнәлешенән тайпылмай алға бара. "Былтыр ҙа, быйылғы уҡыу йылында ла уҡытыусылар һәм хеҙмәтләндереү персоналы штатын ҡыҫҡартманыҡ. Класс комплекты ла элеккесә һаҡланып ҡалды. Шулай уҡ белем биреүҙең төбәк компоненты беҙҙә тулыһынса уҡытыла. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән тыш, Башҡортостан тарихы, Башҡортостан географияһы, Башҡортостан мәҙәниәте буйынса дәрестәр өсөн айырым сәғәттәр ҡаралған", - тип шатлығын уртаҡлашты гимназия директоры.

БИНА ЕМЕРЕК...

әммә күңел бөтөн

Республика Башҡорт лицей-интернатының етенсе синыфына быйыл 75 уҡыусы ҡабул ителде. Үткән уҡыу йылы аҙағында мәктәп бинаһының авария хәлендә ҡалыуы арҡаһында килеп сыҡҡан ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, лицей уҡыусыларға ҡытлыҡ кисермәй. Егерме йыл эсендә лицейҙың алдынғы мәктәптәр исемлегенә инеүе, уҡытыу-тәрбиә эше яҡшы ойошторолоуы, сығарылыш синыф уҡыусыларының йөҙ процденты менән тиерлек юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүе тураһында республика райондарында йәшәүсе ата-әсәләр хәбәрҙар, шуға ла уларҙы мәктәптең ябылыу мөмкинлеге тураһындағы имеш-мимештәр ҡурҡытмаған. Лицей директоры Фәнил Йәмил улы Нуриев әйтеүенсә, ауылдарҙа мәктәптәрҙең ябылыуы ла быға йоғонто яһамай ҡалмаған. Күптәрҙең балаларын уҡытырға күрше ауылдарға, район үҙәктәренә йөрөткөһө килмәй. Шуға күрә лә һайлау интернаттарға төшә лә инде. РБЛИ иһә был исемлектә алдынғы урындарҙы биләй.

Лицей уҡыусыларын яңы уҡыу йылы менән ҡотларға Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева килгәйне. Байрам тантанаһынан һуң ул унынсы, ун беренсе синыф уҡыусылары менән осрашыу үткәрҙе. Үҙенең эшмәкәрлеге менән таныштырҙы. Уҡыусыларҙы тырыш булырға, юғары маҡсаттар ҡуйырға һәм ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырырға, ҡыйынлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмаҫҡа саҡырҙы.

Юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәргә, тигәндә, лицей уҡыусылары был йәһәттән һынатмай. Лицейҙы тамамлаған уҡыусылар Башҡортостандың ғына түгел, Рәсәйҙең, донъяның төрлө ҡалаларында белем ала. Мәҫәлән, үткән сығарылыштағы 59 уҡыусының 19-ы Мәскәү ҡалаһының абруйлы юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән. Ҡалған лицейсылар Башҡортостандан тыш, Санкт-Петербург, Пермь, Ырымбур, Силәбе, Ҡаҙан, Калининград, Һамар, Магнитогорск, Екатеринбург ҡалалары вуздарында белем аласаҡ.

Лицей уҡыу барышында яңы инновацияларҙы әүҙем индерә. Мультимедиялы уҡытыу, робот техникаһы шулар иҫәбенән. Мәҫәлән, информатика уҡытыусыһы Айрат Наил улы Ишимбаев Силәбе өлкәһендә үткән робот техникаһы буйынса ярышҡа барып, ошо йүнәлеште Башҡорт лицей-интернатында ла башлап ебәреү теләге менән янып ҡайта. Шулай итеп, РБЛИ республикала беренселәрҙән булып уҡыу процесында роботтарҙы ҡуллана башлай. Үткән йылда уҡыусылар Силәбе өлкәһенең Копейск ҡалаһында һәм Мәскәүҙә робот техникаһы буйынса ярыштарҙа уңышлы сығыш яһап ҡайта. Фәнил Йәмил улы әйтеүенсә, быйылғы уҡыу йылында лицей-интернат республика кимәлендә робот техникаһы буйынса ярыш үткәрергә ниәтләй.

Әлбиттә, ошондай көслө уҡыу йортоноң яңы уҡыу йылын үҙ бинаһында башлай алмауы үкенесле. Быйыл уҡыусылар күрше 5-се профессиональ лицей бинаһында белем аласаҡ. Уның уҡыу бүлмәләре уҡытыу өсөн йыһазландырылған да инде. Ә лицейҙың үҙ бинаһына килгәндә, уға ентекле экспертиза үткәрелергә, шунан һуң ғына уның яҙмышы хәл ителергә тейеш. Нисек кенә булмаһын, был уҡыу йорто яңы, заманса бинаға лайыҡлы.

Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

ҺЫУ ҺӘМ ГАЗ ӨСӨН...

кемгә түләргә?

Өфө ҡала округы хакимиәтендә күп фатирлы торлаҡ милекселәре һәм идаралыҡ компанияларының гражданлыҡ-хоҡуҡи мөнәсәбәттәрен көйләү маҡсатында түңәрәк ҡор үтте.

Ултырышта БР-ҙың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Рафаил Зиннуров, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, торлаҡ сәйәсәте һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы буйынса комитет ағзаһы Павел Качкаев, йәмәғәт һәм идаралыҡ ойошмалары етәкселәре ҡатнашты.

Торлаҡ хужалары һәм йорттарҙы тейешле кимәлдә бағып тоторға тейеш булған идаралыҡ компаниялары араһындағы килешеүҙәр йыш ҡына аңлайышһыҙ хәлдәр, һорауҙар тыуҙыра. Халыҡ бигерәк тә коммуналь хеҙмәт хаҡтарының ҡиммәт булыуына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Шуға күрә бөгөн ошо килешеүҙәргә үҙгәрештәр индереү талап ителә. Идаралыҡ компаниялары ниндәй эштәрҙе башҡарырға, ә ниндәй вазифаларынан баш тартырға тейеш, торлаҡ хужалары идаралыҡтарғамы, әллә туранан-тура ресурстар менән тәьмин итеүсе предприятиеларға түләргә тейешме - тәү сиратта ошо мәсьәләләр үҙәктә тора.

Ултырышта ҡатнашыусыларҙың күбеһе предприятиелар менән тура килешеүҙәр төҙөү мөһимлеген билдәләне. Шулай ҙа халыҡ өсөн был уңайлы булырмы-юҡмы - әлегә бер кем дә яуап бирә алмай. Торлаҡ хужаларына бер генә түгел, ә унлаған түләү ҡағыҙы килә башлаясаҡ, һәр хеҙмәт өсөн айырым түләргә кәрәк буласаҡ. Шуға ҡарамаҫтан, закон тарафынан был юҫыҡта бөгөн сикләүҙәр юҡ. Торлаҡ милекселәре йыйылыш үткәреп, предприятиелар менән килешеү төҙөй ала. Екатеринбург, Силәбе кеүек күрше ҙур ҡалаларҙа был тәжрибә йылдам таралып бара. Өфөлә лә ҡайһы бер йорт хужалары предприятиеларға сыға. Был осраҡта закон буйынса һуңғылары торлаҡ милекселәренең теләген үтәргә тейеш.

"Уфаводоканал" предприятиеһы менән дә килешеү төҙөргә теләүселәр бар. Әммә предприятие етәкселеге йорт хужалары менән тура бәйләнешкә инеү яғында түгел. Халыҡ хәҙер үҙ хоҡуғын прокуратура аша яҡларға мәжбүр. Түңәрәк ҡорҙа ла предприятиеның генераль директоры Вячеслав Гордиенко торлаҡ хужалары менән килешеүҙәр төҙөүгә ҡырҡа ҡаршы булыуын белдерҙе. Уның фекеренсә, абоненттар күбәйеү менән предприятиела бухгалтерҙар штатын арттырырға кәрәк буласаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Октябргә тиклем Дәүләт торлаҡ инспекцияһы "Башҡортостан Республикаһы Торлаҡ комитеттары союзы" менән берлектә күп фатирлы йорттарҙы ҡарау буйынса идаралыҡ ойошмалары тарафынан башҡарылырға тейеш булған вазифаларҙы яңынан барлап сығасаҡ. Күп фатирлы йорттар советтары торлаҡ хужалары менән йыйылыштар үткәреп, коммуналь хеҙмәтләндереү тураһындағы килешеүҙе туранан-тура предприятиелар менән төҙөү мәсьәләһен ҡараясаҡ.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Күҙ ауырыуҙары

Компьютер, телевизор, уйын приставкалары күҙҙе боҙа. Шулай уҡ йоҡлар алдынан ваҡ шрифт менән яҙылған текстарҙы оҙаҡ итеп уҡыу, киске ашты ашағас та йоҡлау күҙгә зыян килтерә. Әбүғәлисина "ҡанды болғансыҡлаған" нәмәләрҙән: тоҙло, нарымһаҡлы, әсе, ҡомалаҡлы аҙыҡтарҙан, шулай уҡ мунсала йыш йыуыныуҙан күҙ боҙола, тип яҙып ҡалдырған. Унан һуң, стресс, депрессия күҙҙәргә насар тәьҫир итә. Татлы анар һутынан сылатҡыстар, әнис төнәтмәһе (уны сәй итеп тә, иртәле-кисле күҙҙәрҙе йыуыу сараһы итеп тә ҡулланалар), кейәү үләне, үгәй инә үләне (кипкән япраҡтарҙы сәйгә ҡушып эсергә була), миндаль сәтләүеге, ҡара бөрлөгән япрағы һәм емештәре, ҡуркума тәмләткесе күҙҙәр өсөн файҙалы. ❖ **Күреү һәләтен яҡшыртыу:** һуған һутын күҙҙән йәш ҡойолғанда, шулай уҡ күреүҙе яҡшыртыу өсөн ҡулланалар. Һуған һутына бал ҡушып, күҙгә аҡ төшөүҙе дауалайҙар. ❖ **Механик йәрәхәт** һөҙөмтәһендә күҙгә аҡ төшһә, яңы йомортҡаны һытып, ағын айырып алырға, һауытҡа һалып, ныуға әйләнгәнсе һелкетергә. Һуңынан ошо шыйыҡ аҡһымдың бер өлөшөн зарарланған күҙгә һалырға. Шарт-лау йәки янғын һөҙөмтәһендә зыян күрһәгеҙ ҙә ошо ысулды ҡулланығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе ҡотҡарып ҡала аласаҡһығыҙ.

Кендек бүҫере

❖ Еүеш ҡыҙыл балсыҡтан "ҡоймаҡ" эшләп, уны бер ҡат марляға урарға, тән температураһына тиклем йылытҡыста йылытырға һәм кендеккә һалырға. Балсыҡтың өҫтөнә полиэтилен ҡаплап, пластырь менән нығытырға. Балсыҡ кибә башлаһа, ипләп кенә уны алырға, ә икенсе көнөнә процедураны ҡабатларға. ❖ Бер нисә тапҡыр бөкләнгән кизе-мамыҡ сепрәкте тоҙло кәбеҫтә һутына тығып еүешләргә, артыҡ һыуҙы һығырға һәм ауыртҡан урынға һалырға. Өҫтөнән шулай уҡ полиэтилен ҡапларға. Тәүлегенә бер тапҡыр компресты яңыһына алыштырырға. 4 көн эшләргә. ❖ Кендек, сандыр һәм ҡыҙыл үңәс бүҫерен аптека көкөртө яҡшы дауалай. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ҡабул итергә. ❖ Умыртҡа баҡанаһы дискыһы бүҫеренә 6х15 үлсәмендәге 1-3 см ҡалынлығындағы яңы алынған йылҡы майы һалырға була. Быныҡ өсөн майҙы целлофан киҫәгенә төрөп, ауыртҡан урынға ҡуйырға, бинт менән бәйләргә, өс тәүлеккә ҡалдырырға. Бер нәмә лә күтәрмәҫкә, эйелеп эшләмәҫкә, киҫкен хәрәкәттәр яһамаҫҡа. Бер тәүлектән хәл яҡшыра.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

АҠЫЛЛЫҒА ИШАРА

АХМАҠЛЫҠ ҠЫНА...

туҙмай ҙа, иҫкермәй ҙә, үҙгәрмәй ҙә

Оло ғына йәштәрҙәге танышым була торғайны. Бергилке күрше булып йәшәнек уның менән. Күптән күргәнем булмаһа ла, иҫемә йыш төшә ул.

Бик ҡыҙыҡ холҡо була торғайны уның. Булмаған ерҙә проблема уйлап таба ла, ах-ух килеп, шуны хәл итеү юлдарын эҙләй, эргә-тирәһендәгеләрҙең бөтәһен дә шуға йәлеп итә. Хәл иткәс, үҙен батырлыҡ эшләгән кеше кеүек тоя. Көндәлек эште лә ҙур ҡаһарманлыҡ ҡылған кеүек башҡара. Ябай ғына йомошҡа ла үҙен оҙаҡ көйләй. Мәҫәлән, иҙәнен йыуырға булһа, был хаҡта бер нисә көн алдан һөйләнә башлай.

- Иҙән йыуып алайым тиһәм, бөгөн шишәмбе икән. Әсәйем, был көндө хатта турғай ҙа йөнөн ҡоймай, был - буш көн, уны тик кенә үткәр. Яңы эш башлама, барыбер килеп сыҡмаҫ, ти торғайны, -тип, өйөн йыйыштырмағанына шулай аҡланыу таба ине.

Шаршамбыла тағы бер сәбәбе сыға. Кесе йома, йомала йыуынты һыу түгергә ярамай тип, йәнә йыумай. Ял көндәрендә ваҡыт тапмаһа, дүшәмбе ауыр көн, тип, тағы иҙәне йыуылмай ҡала. Өндәшмәй генә үткәрһә ярай ҙа, был хаҡта көнөнә әллә нисәмә тапҡыр һөйләй, шулай итәйемме, былай итәйемме икән, тип, ҡырҡ тапҡыр кәңәш һорай. Өйөн йыйыштырып, иҙәнен йыуып алһа, уның, шул иҫәптән беҙ - күршеләре өсөн дә ҙур ваҡиға була. Хәҙер инде ул ни эшләгәнен, нисек итеп йыуғанын тәфсирләп һөйләй.

Берәй нәмә бешерергә уйлаһа ла, көн элгәре күршеләрен аптырата башлай. Ғөмүмән, ул үҙенең бөгөн нимә ашағанын, нимә эшләгәнен, иртәгә ни ҡыласағын, ҡайҙа барасағын, ниндәй төш күргәнен бөтәһе лә белеп торорға тейеш, тип уйлай ине булһа кәрәк. Өйөндәге сүпте сығарырға ла, кешенең бысраҡ кейемендә соконорға ла күп һорап тормай. Сер итеп һиңә генә әйтәм, тип, ниҙер әйтә башлаһа, сер булғас, бер кемгә лә әйтмә, шул иҫәптән, миңә лә, тип тыңламай башланым аҙаҡ, сөнки уның, һиңә генә әйтәм, тигән был серен, кәм тигәндә, бишәү-алтау белә. Был бишәү-алтауҙың үҙҙәренең яҡын кешеһе шул сама - шулай бының сере тәүҙә ҡатта, шунан подъезда, артабан ихатала тарала. Үҙенә барып етһә, был хәбәр кемдән сыҡты икән, тип, "ғәйепле" кешене эҙләй башлай, кемгә нәмә әйткәнен онотоп, һиңә генә әйткәйнем, ниңә кешегә тараттың, ярыҡ барабан, сер тотмаҫ, тип үпкәләп тә йөрөп ала. Шул арҡала хатта ҡасандыр иң яҡын кешем тигәне менән дә дошманлашып киткәне бар. Ундайҙарға ҡарата бигерәк аяуһыҙ ҡылана, асыҡтан-асыҡ этләшергә лә ҡурҡмай ине.

Күрше булып оҙаҡ йәшәргә тура килмәне уның менән, шөкөр. Фатир алып, тәүҙә ул күсеп китте, бер аҙҙан мин йәшәгән урынымды алмаштырҙым.

Ҡала бәләкәй булһа ла, башҡа осрашырға насип булмағайны. Күптән түгел урамда күрештек. Былай ҙа ҡураныс кәүҙәһе тағы ла йоҡарып, бәләкәй генә булып ҡалған. Тик асҡаҡ йөҙө, күҙҙәре генә үҙгәрмәгән. Яҡын дуҫын осратҡандай ҡосаҡлап алды ул. Ҡыҫҡа ғына ваҡытта минең өсөн бөтөнләй ят булған яңы күршеләрен яманлап өлгөрҙө. "Иртәнән алып подъезға инә алмай йөрөйөм әле, минең әйткән һүҙҙе күршемә еткергәндәр ҙә, уны-һы таяҡ тотоп ҡайтыуымды көтөп ултыра. Ҡурҡыуын ҡурҡмайым да ул, әйҙә, көнөн әрәм итеп, көтә биркен, йөрөй бирәм әле. Бына нисәмә йыл күрмәгән һине осраттым", - тип ваҡештәрен күрһәтеп, ихлас йылмайған булды.

Ваҡыт үтеү менән кеше яйлап бөтә нәмәһен юғалта: йәшлек матурлығы юғалып, ҡартая, һаулығын юғалтып, ҡаҡшай, тормош, донъя, мәңгелек ҡиммәттәр тураһында уйланыуҙары башҡа йүнәлеш ала. Тик ахмаҡлыҡ ҡына йылдар үткәс тә шул көйө ҡала икән. Шундай фекер тыуҙы элекке күршем менән хушлашҡас.

Ләйсән ӘМИРОВА.

ЯҢЫ РУБРИКА: "ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ"

НИГЕҘЕ - ШУЛ УҠ ТӘРБИӘ,

йәғни "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" дәрестәре тураһында

Инеш һүҙ

Быйылғы уҡыу йылында илебеҙ мәктәптәрендә "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тигән дөйөм атама аҫтында алты төрлө йүнәлештә яңы предмет уҡытыла башланы. Йүнәлештәр төрлө һәм ул мәктәптәрҙә атай-әсәйҙәр ҡатнашлығында һайлап алынды: "Православие мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Йәһүд мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Буддизм мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Дини мәҙәниәттәр нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре". Башҡорт мәктәптәре өс йүнәлеште һайланы: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Дини мәҙәниәттәр" һәм "Донъяуи этика нигеҙҙәре". Рус телендә нәшер ителгән дәреслектәр Рәсәй Мәғариф академияһы һәм Рәсәй Фәндәр академияһы тарафынан ыңғай баһа алды. Башҡорт мәктәптәре һайлаған өс йүнәлештәге дәреслектәр ошо әсбаптарҙан тәржемә ителде. Уҡытыусыларҙың һорауы буйынса "Киске Өфө" гәзитендә ошо өс йүнәлеш буйынса ла бер аҙ методик кәңәштәр биреп бармаҡсыбыҙ.

Кешелек донъяһы бар булғандан алып бөтөн халыҡтар ҙа киләсәк быуынға яҡшы тәрбиә бирергә, яҡшылыҡ менән яманлыҡты айырып өйрәтергә ынтылған һәм ошо төп маҡсатын ғәмәлгә ашырыр өсөн үҙенең тәрбиә ҡанундарын булдырған. Ул - халыҡ педагогикаһы. Илебеҙ мәктәптәрендә ошо ҡиммәтле байлыҡ файҙаланылманы. Ғөмүмән, мәктәптәрҙә тәрбиәгә түгел, ә белем биреүгә иғтибар нығыраҡ бүленде. Билдәле, фәҡәт сәләмәт рухлы, тәрбиәле кеше генә йәмғиәтебеҙ, халҡыбыҙ өсөн ниҙер эшләй, уның алға китеүенә тос өлөш индерә һәм алған белемен маҡсатлы ҡуллана ала. Илебеҙ мәғарифы өлкәһендәге ошо күҙ уңынан ысҡындырылған мөһим тармаҡ Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан бынан егерме йыл элек үк яйға һалына башланы - башҡорт мәктәптәрендә беренсе кластан алып унынсы класҡа саҡлы "Башҡорт мәҙәниәте. Тормош һабаҡтары" предметы уҡытылды. Тап ошо предмет халыҡ педагогикаһы нигеҙендә изгелек тойғоһо орлоҡтары һалыуҙы, илһөйәрлек, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәләүҙе күҙҙә тотто һәм йәмәғәтселек тарафынан бик йылы ҡаршы алынды. Мәктәп уҡыусыларында бәләкәйҙән үк яҡшылыҡты яуызлыҡтан айырып өйрәтеү, әҙәп-әхлаҡ ғәҙәттәре, халҡыңа, иленә, теленә, традицияңа һөйөү тойғоһо тәрбиәләү башҡорт мәктәптәрендә ошо предмет аша һалына һәм ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

"Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" предметының да төп маҡсаты ошо: уҡыусыла әҙәп-әхлаҡ төшөнсәләре тәрбиәләү. Шуның өсөн 4-се класта был яңы индерелгән предметты алып барыусы уҡытыусыларға "Башҡорт мәҙәниәте. Тормош һабаҡтары" дәреслектәренән файҙаланырға тәҡдим итәбеҙ. 2012 йылдан башлап I-VII, 1993-2011 йылдарҙағы I-X кластар өсөн дәреслектәр уҡытыусыға ныҡ ярҙам итер. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундары тупланмаһы булған "Урал батыр" эпосы һәм "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналында эпостар һәм халҡыбыҙҙың бай ижадының башҡа жанрҙары буйынса ла тәрбиә ҡанундары тураһында даими бирелә барған дәрес өлгөләре, башҡорт халҡының этнопедагогикаһы менән шөғөлләнгән ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәре уҡытыусыларыбыҙҙың һәр саҡ ҡул осонда булһа, бик яҡшы булыр ине.

Дини мәҙәниәт нигеҙҙәрен өйрәнеү дүртенсе класс уҡыусыһына ҡатмарлыраҡ, әлбиттә. Шуның өсөн тәүге дәрестәрҙә үк балаға диндәрҙең, милләттәр, телдәр кеүек үк, төрлө булыуын мотлаҡ аңлатырға кәрәк. Бала бер диндең дә икенсе диндән өҫтөн түгеллеген, бар диндәрҙең дә бер маҡсатлы - яҡшылыҡҡа, изгелеккә өндәүсе тәғлимәт икәнлеген аңларға һәм ысын динде секталар йүнәлешенән айыра белергә тейеш. Был йәһәттән шәхсән мин, "Тормош һабаҡтары" предметы авторҙарының береһе һәм әле беҙ ҡулығыҙға алған яңы дәреслектәрҙе тәржемә итеүсе булараҡ, "Дини мәҙәниәттәр нигеҙҙәре"н һайлаған мәктәптәрҙе хуплайым һәм артабан, мөмкин булһа, бөтөн мәктәптәргә лә ошо йүнәлеште һайларға тәҡдим итер инем. Был - минең ҡарашым, әммә ул тәжрибә, тупланған белем, күҙәтеүҙәр, осрашыуҙар, фекер алышыуҙар аша яһалған һығымта. Беҙҙең заманда халыҡтар менән аралашыу, төрлө илдәргә сығыу, интернет селтәре аша танышыу, мәғлүмәттәр алыу мөмкинлектәре шул тиклем киңәйҙе, уҡыусының һәр төрлө яңылыҡ менән ҡыҙыҡһыныуы артҡандан-арта бара. Шулай уҡ дин менән ҡыҙыҡһыныу ҙа көсәйә. Ә дин - ул бик сетерекле, нескә өлкә. Дин - ул зиһен менән генә түгел, күңел менән тойоп ҡабул итә торған тәғлимәт.

Уҡытыусыларҙың үҙҙәренә төп кәңәшем: был предметты уҡытҡан саҡта иң мөһиме - дин менән милләтте бутамау. Яңыраҡ бер мәктәптә осрашыу үткәргәндә ун беренсе класс уҡыусыһы миңә шундай һорау бирҙе: "Беҙгә, башҡорттарға, мәҫәлән, тажиктар менән ғаилә ҡороргә мөмкинме? Апайым тажик егетенә кейәүгә сығырға уйлағайны, атайым ҡырҡа ҡаршы тора. Ни өсөн ярамай? Улар ҙа, беҙ ҙә мосолман бит?" Таҡтала схема төҙөп, милләттәрҙең нисек барлыҡҡа килгәнен, һәр милләттең һәм диндәрҙең ни икәнен, башҡорттарға ислам диненең ҡасан килтерелгәнен аңлатып бирҙем. Кешенең йәки халыҡтың тыумыштан уҡ милләтле, туған телле, традициялы булып тыуыуын, ә динде һайлап алырға мөмкин икәнлеген, хатта бер ғаиләлә төрлө дин тотоусыларҙың булыу ихтималлығын һәм шул ваҡытта дин тотмай ҙа иманлы булырға мөмкин икәнлеген аңлаттым. Мәҫәлән, илебеҙ тарихы башланған осорҙа Русь иленең баш ҡалаһы Киевта кенәз Владимир идаралыҡ иткән. Кенәзгә төрлө дин әһелдәре үҙ диндәрен тәҡдим итеп килә. Владимир христианлыҡты һайлай һәм үҙе башлап һыуға сума. Шулай итеп, 988 йылдан башлап христиан дине рус ерендә ныҡлап тарала. Башҡорттарға ислам VII - VIII быуаттарҙа индерелә башлай, ә башҡорт тигән милләт уға саҡлы уҡ быуаттар элек бар булған. Милләт - ул кешенең, халыҡтың ҡанына һалынған булмышы, ә дин - ул донъяны Аллаға /буддизм диненән башҡалары/ бәйләп аңлатҡан тәғлимәт. Башҡортлоҡ - булмыш, мосолманлыҡ - ислам динен ҡабул итеү.

Башҡорттарҙың күпселеге, әлбиттә, ислам динле, үҙҙәрен мосолман, тип һанай. Әммә мосолман дине әҙәбен тулыһынса аңлап етмәгәндәр ҙә бар. Мәҫәлән, бер генә миҫал. Ҡайһы бер башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары үҙҙәренең мосолман динле икәнлеген күрһәтеү өсөн ғәрәпсә кейенеп, сәс күрһәтмәй, яулыҡ бөркәнеп йөрөй башлай. Ә бит башҡорт ҡыҙҙары һәр ваҡыт, исламға тиклем дә, сәсен, сәс толомон күрһәтеп йөрөгән. Хатта сәс толомоноң берәүме, икәүме икәнлегенә ҡарап, ҡыҙ кешеме, кейәүҙәге йәш ҡатынмы икәнлеген айырғандар. Кейәүгә сыҡҡандан һуң ғына баштарына маңлай сәстәрен ҡапларлыҡ кейем /ҡашмау, таҫтар, һарауыс/ кейгәндәр. Һәр хәлдә, боронғо башҡорттар төшөрөлгән бер генә һүрәттә лә ғәрәпсә кейенгән башҡорт ҡатын-ҡыҙын осратҡаным булманы.

Шуның өсөн һәр уҡыусы диндең ошо донъяны бар итеүсе ҡөҙрәтле көскә яҡынайыу юлы, уның асылын аңларға тырышыу ысулы, һәр кешегә кәрәк булған әҙәпкә, әхлаҡ ҡағиҙәләренә өйрәтеүсе, яҡшылыҡҡа өндәүсе һабаҡтар тупланмаһы икәнлеген аңларға тейеш. Ике-өс йәшлек балаға яулыҡ бөркәндереп мәсеткә алып барыу йәки мәктәптә, эш урындарында яулыҡ ябынып йөрөү хоҡуғы даулау динле, иманлы булыу тигәнде аңлатмай әле. Иман - ул эске намыҫ тойғоһо. Иман - ул үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡ тойғоһо. Баланың теле асылғас та, хатта туған телендә йүнләп һөйләшмәгән мәлендә үк, бөтөнләй ят булған ғәрәп телендә доға ятлатып, шуны мәртәбәгә һанап үҫтереп тә, ул баланың аҙаҡ донъяла ислам диненән башҡа ла диндәрҙең булыуын аңлап алғас, мосолманлыҡтан бөтөнләй биҙгән осраҡтар ҙа бар. Аңламай ятлай торған һабаҡ - ул алфавит һәм ҡабатлау таблицаһы ғына. Ә доғаларҙы аңлап, мәғәнәһенә төшөнөп ятларға тейеш кеше. Шуның өсөн дин дәрестәрендә фәҡәт ошо ғына дин дөрөҫ йүнәлештә, ошо дингә генә табынырға тейешһең, һин мотлаҡ шулай эшләргә, былай итергә тейешһең, тип түгел, ә, әйтеп китеүемсә, диндәрҙең барлыҡҡа килеү маҡсатын - кешелек донъяһын тәртиптә тотоу, яҡшылыҡҡа ынтылыу сараһы булыуын аңлата барырға һәм баланың яҡшылыҡҡа килеү юлын үҙенә һайлау мөмкинлеге ҡалдырырға кәрәк.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

(Дауамы бар).

ФАРАЗ

Республикабыҙҙың күп кенә райондарында яңғыҙ йәки бер нисәүҙән торған, ергә ҡаҙып ултыртылған вертикаль таш баҡаналарҙы осратырға була. Халыҡ бындай таштарҙы: "сәнскән таш", "үҫкән таш", "әбейташ", "ҡолонташ" тип атай. Ғалимдар иһә уларҙы "менгир" тип атай. Бындай менгирҙар бигерәк тә республикабыҙҙың Көньяҡ Урал райондарында һәм уларға сиктәш Силәбе, Ырымбур өлкәләре райондарында күпләп осрай. Был яҡтарҙа менгирҙар яңғыҙ ғына түгел, хатта тотош аллея булып теҙелгән көйө лә осрай.

НИНДӘЙ ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ...

сәнскәнташтар, әбейташтар йәки менгирҙар?

Ололар һөйләүенә ҡарағанда, бындай сәнскәнташтар элегерәк бигерәк тә күп булған, тик сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү эпопеяһы барышында уларҙы ҡеүәтле тракторҙар менән, һөрөргә ҡамасаулай, тип йолҡоп алып, ташлап бөткәндәр. Беҙҙең Башҡортостандан тыш, бындай менгирҙар донъяның күп кенә башҡа тарафтарында ла осрай. Уларҙың иң данлыҡлыһы: Британиялағы "Стоунхендж" менгирҙар ҡулсаһы. Хәҙерге заман ғалимдарының күпселеге был "Стоунхендж" ҡулсаһын бик боронғо астрономик обсерватория булырға тейеш, тип фаразлай. Канар утрауында ла эреле-ваҡлы бик күп менгирҙар һаҡланған. Был менгирҙар тирәләй ориентация өсөн азимут буйынса таштар ҡуйылған. Шулай уҡ Африкала Конго йылғаһы менән Чад күленә яҡын ғына Буар тигән ерҙә өсәр метрлыҡ йөҙәрләгән менгирҙар әле лә һерәйешеп баҫып тора. Был менгирҙар беҙҙең эраға ҡәҙәр алтынсы, бишенсе меңйыллыҡтарҙа ҡуйылған.

Евразия ҡитғаһында табылған менгирҙарҙың күбеһе неолит дәүеренә ҡарай. Мәҫәлән, Рәсәйҙең Хакас Республикаһында табылған менгирҙар шул дәүерҙәрҙән алып тора. Көнбайыш Европаның күпселек менгирҙарының ҡуйылыу ваҡыты бронза дәүеренә ҡарай. Мәҫәлән, Бретандың көньяҡ яры буйында урынлашҡан данлыҡлы Карнак менгирҙар аллеяһы шул ваҡыттарҙан һаҡланып ҡалған боронғолоҡ мираҫы. Археологик тикшеренеүҙәр ваҡытында табылған материалдарҙан сығып, ғалимдар менгирҙар янында ниндәйҙер йолалар үткәрелгәнен һәм шул саҡта ҡорбанға мал салғандарын асыҡлаған. Әммә менгирҙар эргәһендә кешене ҡорбан килтереү, йәиһә менгир янында кешене ерләү осрағы фәнгә билдәһеҙ. Көнбайыш Европалағы менгирҙарҙың ҡайһы берҙәрен ғалимдар боронғоларҙың йондоҙҙарҙы һәм Ҡояш, Ай кеүек башҡа күк есемдәрен күҙәтеү өсөн ҡуйыуҙары ла бик ихтимал, тип иҫәпләй.

Сит илдәрҙә менгирҙар ғалимдар тарафынан ниндәйҙер кимәлдә өйрәнелһә лә, элекке СССР киңлектәрендә осраған әллә күпме менгирҙар әле булһа үҙҙәрен тикшереүҙе түҙемле генә көтөп тора. Ҡайһы берҙәре иһә тикшергәнде көтөп ала алмайынса, кешеләр тарафынан юҡ ителәләр. Беҙҙең республикала һәм күршеләребеҙ Силәбе өлкәһендә табылған менгирҙарҙы өйрәнеү әле саҡ башланып ҡына тора. Был йәһәттән Силәбе дәүләт университеты ғалимдары әүҙем генә эшләй. Улар беҙҙең республикала табылған менгирҙарға ла иғтибар итә. Мәҫәлән, Башҡортостандың Учалы районы Ахун ауылы эргәһендә 1996 йылда табылған менгирҙар ҡулсаһын Силәбе ғалимдары бик боронғо астрономик обсерватория тип иҫәпләй. Ахун менгирҙар комплексы ярҙамында боронғо кешеләр: ҡояштың сығыу һәм байыу мәлен, ҡышҡы иң ҡыҫҡа көнө менән иң оҙон төнөн; шулай уҡ йәйҙең иң оҙон көнө менән иң ҡыҫҡа төнөн; яҙғы һәм көҙгө миҙгелдәрҙә көн менән төн тиңләшкән саҡты ярайһы уҡ аныҡ, теүәл билдәләй алғандар. Ахун менгирҙары ярҙамында боронғолар шулай уҡ Айҙың хәрәкәтен дә тикшергән һәм уның ҡасан ҡалҡыуын, батыуын, тулыуын йәки кәмей башлауын күҙәткән. Был менгирҙарҙың шундай функция үтәгәнлеген Силәбе ғалимдарының Ахун менгирҙары менән үткәргән эксперименттары, тикшереүҙәре раҫланы. Ошоларҙы асыҡлаған ғалимдар, Ахун менгирҙар комплексын Евразия ҡитғаһындағы иң боронғо астрономик обсерватория, тип иҫәпләй. Улай ғына ла түгел: Ахун менгирҙар комплексы Англияның, үрҙә телгә алып кителгән данлыҡлы Стоунхендж комплексы менән бер үк типта, хатта төҙөлөү дәүере лә бер үк, тип иҫәпләй Силәбе ғалимдары.

Аллея йәки түңәрәк ҡулса формаһында ҡуйылған менгирҙар комплексының күк есемдәрен күҙәтеү өсөн һәм шулай уҡ календарь менән бәйле икәнлеген ғалимдар ярайһы ышаныслы иҫбат итһәләр ҙә, айырым торған менгирҙарҙың, халҡыбыҙ телендә "сәнскәнташ", "ҡолонташ", "әбейташ" тип аталғандарының тәғәйенләнештәрен әле берәүҙең дә аныҡ ҡына аңлата алғаны юҡ. Фараздар күп һәм төрлөсә. Ҡайһы бер ғалимдар, боронғолар уларҙы тау, ер, һыу кеүек урындарҙың эйәләренә ҡуйғандар һәм эргәләрендә ҡорбан салып, эйәләрҙән үҙҙәренә ярҙам итеүҙәрен, миһырбанлыраҡ булыуҙарын үтенгәндәр, тип һанай. Кешеләр борон-борондан тауҙарҙы изгеләштергән һәм уларға табынған. Мәҫәлән, боронғо гректарҙың Олимп тауы, япондарҙың Фудзи тауы, боронғо төркиҙәрҙең изге Отукен (Үтәгән, -**З.Ә.**) тауы шундай изгеләштерелгән һәм табыныу, ҡорбан килтереү урыны булған. Боронғо дәүер кешеләре, шул иҫәптән беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа, донъя өс ҡаттан - ер өҫтөнән, күктән, һауанан һәм ер аҫты донъяларынан тора, тип уйлаған. Боронғолар уйынса, тау башы ер менән күк тоташҡан урын һәм унан күккә олғашырға мөмкин булған. Шуға күрә, тау һәм уға яҡын тирәләге урындың эйәләренән кешеләр үҙҙәренә яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙы һораған, эйәләрҙең күңелен күреү маҡсатында уларға арнап, ҡорбан салғандар. Башҡорттарҙың тауға ҡарата ихтирамлы, иғтибарлы булыуы тураһында XVIII быуаттың урыҫ ғалимдары Георги, Лепехин һәм башҡаларҙың юлъяҙмаларынан миҫалдар килтерергә була.

Башҡорттар тиктомалға, бер ниндәй хәжәтһеҙ изге тауҙарының башына менеүҙе тыйған. Ундай изге тау баштарына менеү хоҡуғына тик ирҙәр, уларҙың да тик иң лайыҡлылары ғына эйә булған. Шулай булғас, кешеләрҙең был менгирҙарҙы йәшәгән ерҙәренә яҡын урынлашҡан тауҙар эргәһенә ҡуйыуы буштан түгел. Силәбе ғалимы Ф.Н. Петров Башҡортостанда һәм беҙҙең ерҙәргә яҡын урындарҙа табылған менгирҙарҙы, улар эргәһендәге әйберҙәрҙе һәм ошо ерҙәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың йолаларын бергә сағыштырып тикшергәндән һуң, менгирҙар - тау һәм ер-һыу эйәләренә ҡуйылған булырға тейеш, тигән фекергә килгән.

Тикшереүҙәр менгирҙарҙың донъяның дүрт тарафы (көньяҡ - төньяҡ, көнсығыш-көнбайыш) менән бәйле булыуын да күрһәтә. Менгирҙарҙың аллея хасил иткәндәре иһә, көнбайыш - көнсығыш йүнәлешендә ҡуйылған. Ғалимдар беҙҙең яҡтарҙа ҡояштың сығыу һәм байыу йүнәлешен һәм ваҡытын менгирҙар менән бәйләп тикшергәндән һуң, яҙғы һәм көҙгө көн менән төн тигеҙләнгән ваҡытта ҡояштың сығыу һәм байыу йүнәлешенең баяғы менгирҙар аллеяһының йүнәлеше менән тап килеүен асыҡлаған. Улар уйынса, был менгирҙар беҙҙең эраға ҡәҙәр дүртенсе быуаттарҙа ҡуйылған булырға тейеш. Яҙғы һәм көҙгө көн менән төн тигеҙләнгән мәл боронғо кешеләр өсөн бик мөһим ваҡыт тип һаналған. Малсылыҡ менән шөғөлләнгән ата-бабаларыбыҙ тәүҙәрәк йылды ике миҙгелдән (яҙ менән көҙҙән) тора, тип уйлаған һәм баяғы көн менән төн тигеҙләнгән ваҡытты миҙгел араһы тип һанаған. Улар ошо ваҡытта төрлө йола байрамдары үткәргән. Был йолаларҙы үтәү өсөн боронғолар ул көндәрҙе аныҡ ҡына белергә тейеш. Шуға күрә, ваҡытты аныҡ ҡына билдәләү өсөн шул сәнскәнташ, ҡолонташ, тип аталған менгирҙарҙы ҡуйғандар ҙа инде.

Зәкирйән ӘМИНЕВ,
ғилми хеҙмәткәр, этнограф.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

орден кавалерҙары

Башҡорт халҡы 1812 йылғы Ватан һуғышында әүҙем ҡатнаша. Был гәмәлдәге армияға 22-28 атлы полк ойошторон ебәреүҙә лә сағыла. Ошо полктарҙың туғыҙы хәрби юлын Парижда тамамлай. Һуғышта ҡатнашыусыларҙың барыһы ла "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге" тигән көмөш миҙал менән бүләкләнһә, бынан тыш, Парижға инеүселәр "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" көмөш миҙалы, айырым хәрби ҡаҙаныштары, ҡаһарманлығы һәм батырлыҡтары өсөн ордендар менән бүләкләнә. Әлеге ваҡытта 7 полктан 40 орден кавалеры булыуы асыҡланды. Шулай уҡ бүләкләнеүселәрҙең бер нисәһе билдәһеҙ частарҙан. 1-се полктан орденға лайыҡ булған 17 кеше билдәле, 2-се полктан - 3, 4-се полктан - 1, 5-се полктан - 2, 9-сы полктан - 5, 8-се полктан - 1, 14-се полктан - 7.

Түбәндә ордендар менән наградланыусыларҙың исем-шәрифтәре һәм хәрби эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт бирелә. Улар 2013 йылда нәшер ителергә планлаштырылған "Башҡорттарҙың хәрби тарихы" ҡамусына индерелгән. Был мәғлүмәттәр Рәсәй дәүләт хәрби-тарихи архивынан (РГВИА, Мәскәү) һәм П.Е. Матвиевскийҙың "1812 йылғы Ватан һуғышында Ырымбур крайы", Ә.Н. Усмановтың "1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы", Ә. З. Әсфәндийәровтың "Любезные вы мои...", "Башҡортостан ауылдары һәм уларға сиктәш территорияларҙың тарихы", "Башҡортостанда кантон идаралығы" китаптарынан алынған. Баҫмаға тарихсы Әнүәр Закир улы Әсфәндийәров әҙерләне.

1-2-се башҡорт атлы полктары 1811 йылдың 7 апрелендәге указға ярашлы, Ырымбур, өлөшләтә Ырымбур губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарынан төҙөлә. Гродноннан Мәскәүгәсә ҙур хәрби юл үтә, Бородино алышында (1-се полк), партизан хәрәкәтендә, Наполеонды Рәсәйҙән ҡыуыуҙа, Көнбайыш Европа ҡалаларын азат итеүҙә, Парижды алыуҙа ҡатнаша. 1813 йылда башҡорт командирҙары старшина Ҡотлогилде Тимеров, есаул Ихсан Әбүбәкеров (Стәрлетамаҡ өйәҙенән) була.

Аманай Торошев (Аманай Турушев) - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Зауряд-йөҙ башы (сотник). Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Үҫәргән олоҫондағы Килсембай ауылынан. 1-се башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Пруссия, Голландия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

Байбулат Торсонбаев - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Үҫәргән олоҫондағы Буранғол ауылынан. 1-се башҡорт полкы составында хеҙмәт итә. 1813 йылда Данциг блокадаһындағы батырлығы өсөн Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.
(Дауамы бар).

✓ - Урлама, алдама, үҙеңдән элек кешене ҡайғырт. Үҙеңде кеше урынына ҡуйып ҡарап, уның хәленә ин. Шул саҡта барыһы ла ыңғай булыр. Бар. Һинең кеүек ирҙәр ҙә тотонмаһа, ул совхозды кем күтәрер?

ЗАМАНА

Гәзит-журналдар бөгөн етәкселәр, уларҙың эш алымдары, тәжрибәһе тураһында яҙмай тиерлек. Ә элек был ғәҙәти хәл һәм төп тема тиерлек ине. Ысынлап та, ниндәй ул замана етәксеһе? Ниндәй эштәр атҡара һәм ниндәй уйҙар менән яна? Етәксемен тигән кешенең барыбер ҙә башҡаларға еткерер, уртаҡлашыр эш итеү алымдары, әйтер һүҙе, әйҙәр тәжрибәһе булырға тейеш бит инде? Етәксе булырға уны кемдер өйрәткәндер, вазифа биләгәнгә тиклем ул арыу ғына һынауҙар үткәндер, имтихандар тотҡандыр? Ҡыҫҡаһы, замана еткәкселәре тураһындағы һүҙҙе Күгәрсен муниципаль районы хакимиәте башлығы Фәрит Мусин тураһында һөйләүҙән башларға булдыҡ. Һылтауы ла сыҡты: Фәрит Мырҙагилде улына ошо көндәрҙә 60 йәш тулды. Икенсе һылтау: күренекле яҙыусы Ғәлим Хисамов был кеше тураһында үҙенең мәҡәләһен тәҡдим итте. Ошо мәҡәлә менән башлап ебәрәбеҙ замана етәкселәренең эш һәм тормош ҡанундары, етәкселек ысулдары тураһындағы һүҙҙе.

Ун икенсе бала

Мырҙагилде ғаиләһендә ун икенсе бала булып тыуа ул. Фәрит исеме ҡушалар уға. Ҡыҫҡа ла, яңғырайышлы ла, башҡортҡа ла, урыҫҡа ла еңел әйтелешле исем. Бәхетен Хоҙай бирһен, ҡалғанын үҙе табыр, тиҙәр.

Фәрит Түбәнге Һаҙ ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, тәүҙә Үргe Һаҙҙағы, шунан Мәҡсүттәге мәктәпкә йөрөп уҡый. Ауылдың бүтән балалары һымаҡ, иртәнге алтыла тораһың да, әйҙә инде, тәпәй-тәпәй... Бер уйлаһаң, көн һайын ун саҡрымдан ашыу йәйәү йөрөп, юл тапап, ниндәй генә белем алаһың инде? Әммә әҙәм балаһы барыһына ла күнә, барыһына ла өйрәнә ала. Бының өсөн үҙҙәре яҡшы белемгә эйә уҡытыусылар, баланың күңеленә ҡанат ҡуя алырлыҡ атай-әсәй кәрәк. Түбәнге һәм Үргe Һаҙҙан филология фәндәре докторы М. Зәйнуллин, Социалистик Хеҙмәт Геройы, нефтсе Ә. Мусин, шахтер И. Әбйәлилов, архитектор Р. Сәлихов, уҡытыусы Х. Шәйәхмәтов, офицер Ф. Мәсәғүтов, журналист С. Сурина, институт ректоры Р. Мәжитов, полковник И. Насипов, уҡытыусы Т. Сәғитовалар сыҡҡан бит. Фәрит шуларға тиң булмаҫлыҡмы ни? Тәүҙәрәк бары тик уҡыу һәм өйҙәге эш ҡайғыһы була үҫмер күңеленде, тора-бара көн һайын йә йәйәү, йә саңғыла саҡрымдарҙы тағатыу аяҡ-ҡулын, кәүҙәһен ҡатҡылландыра, ит ҡундыра, сыныҡтыра. Мәктәптәге ярыштарҙа ҡатнашып, беренсе урындарҙы алыу шундай ҡарарға этәрә: ә ни эшләп киләсәктә спорт менән шөғөлләнмәҫкә? Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, тап шул йылдарҙа Күмертау ҡалаһында физкультура уҡытыусылары әҙерләү өсөн педагогия училищеһы асыла. Минең юл шунда, тип уйлай Фәрит, атай-әсәһе ҡаршы төшмәй, уҡытыусылар хуплай.

Педучилищела уҡыған йылдарын тотош бер күнекмә кеүек иҫләй Фәрит Мырҙагилде улы. Әле генә саңғыла уҙышалар, хәҙер генә йүгерергә сығалар, унан һуң бокс, көрәш көтә. Училищеның спорт йондоҙҙарының береһенә әүерелә ул. Уҡып бөткәс, ашҡынып ауылына ҡайтып төшә. Ҡулда - диплом, беләктә - көс, башта - белем. Күрше Арҙат мәктәбенә физкультура уҡытыусыһы итеп тәғәйенләйҙәр уны. Мәктәптә бокс секцияһы асып ебәрә, ауыл йәштәрен волейбол уйнарға өйрәтә, ә кистәрен үҙешмәкәр түнәрәктәрендә концерт, спектакль ҡуялар. Фәрит иртәнге биштә йоҡонан тора ла күрше ауылға эшкә китә, төнгө ун-ун берһеҙ аяҡтарға ял юҡ. Әйтергә кәрәк, ошо рәүешле тормошто ул әле лә ҡуйғаны юҡ. Алтмышы тулып килһә лә, биштә уяна ла, ҡул-аяғын яҙа һәм тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эштең сиратағыһына тотона. Ошоно ул тормош тип атай. Бүтәнсәне белмәй һәм белергә лә теләмәй.

Минең уй тигән арғымаҡ самаһыҙ йыраҡҡа ырғыны, шикелле. Фәриткә ун һигеҙ ҙә тулмағайные әле, инде алтмышты һөйләй башлағанмын. Тыру, фекер! Фәрит, ана, Арҙай мәктәбендә "Октябрь" совхозының комсомол ойошмаһы секретары менән күреште. "Ауыл йәштәре лә, мәктәп балалары ла ауыҙына ҡарап, артындан бер тотам ҡалмай йөрөй. Әйҙә, һин бүлексәнең комсомол башлығы бул", - тигән тәҡдим ишетте һәм ризалашты. Комсомол эшмәкәрлеге ойоштороу, йәштәрҙе әйҙәү менән ҡуша байтаҡ ҡына ҡағыҙ эшенән дә тора. Быларына ла өйрәнә Фәрит. Әүәлерәк: "Эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең - үҙеңә", - тип тә ҡуя торғайнылар. Шуның һымаҡ, өйрәнеү Фәриткә лә ҡамасау итмәй. Оҙаҡламай уның үҙен совхоздың комсомол ойошмаһына секретарь итеп һайлайҙар. Бүлексәлә өйрәнгәндәрҙең файҙаһы ошонда тейә.

Фәрит Мусинды ла етәксе итеп бер ҙә уҡытмай. Ауыл хужалығы институтында иҡтисадҡа өйрәтәләр, әммә кеше менән эшләүгә түгел. Быларына ул Арҙат мәктәбендә эшләгәндә совхоздың комсомол секретарынан, әрмелә Вадим Ибраһимовтан, Арҙат бүлексәһендә саҡта идарасы Баһаповтан, совхоз директоры Недорезковтан, беренсе етәкселәр Ғәбитов менән Аҙнағоловтан өйрәнә. Әммә тормош һабаҡтарының иң өлгөләһен атаһы Мырҙагилде бирә, ҡалған иң әсеһен тормош үҙе уҡыта.

Әрме хеҙмәте - үҙе бер һабаҡ

Ир-егеттең һәр ҡайһыһы, аяҡҡулы теүәл, һаулығы ярарлыҡ булһа, әрме хеҙмәтен үтергә бурыслы. Мусинға ла берҙән-бер көндө "Әйҙә, һинең сират еттe", тиҙәр. Алыҫтағы Чита өлкәһенә ракета ғәскәрҙәре часына барып юлыға егет. Әрмелә йыш ҡына хеҙмәтте элекке эшеңә ҡарап ҡоралар. Фәриттең быҙаса комсомол секретары булғанлығы бөтәһе өсөн дә ҡулай күренә. Ротала комсомол эшмәкәрлеген йөкмәтәләр уға, аҙаҡ частең сәйәсәт буйынса командир урынбаҫарының ярҙамсыһына тиклем күтәрелә. "Сәйәсәт буйынса командир урынбаҫары Ибраһимов Вадим Ғәббәс улы тигән кеше ине, - тип иҫләй ул заманды Фәрит Мырҙагилде улы. - Бик күп йылдар үткәс кенә белдем, үҙебеҙҙең Хәйбулла башҡорто булған икән". Шул кеше менән ҡулғаҡул тотоношоп эшләйҙәр, йәшәйҙәр улар. Часть командиры ла яҡын итә Мусинды, сөнки егет нимәгә тотонһа ла яҡшы итеп эшләй, һәммә кеше менән дә уртаҡ тел таба белә. Әрмелә ошо сифаттарҙан да яҡшыраҡ таныҫ ни бар һуң? Бойороу, ҡыҫҡырыу, һүнегеүме? Эйе, әрме тормошонда былары ла етерлек, әммә улар кеше күңеленә үтә торған юлда үҫкән дегәнәк шул. Файҙалы үҫемлек менән ҡуша ҡыйы ла була бит. Ике йыл хеҙмәт иткән арала Мусинды коммунистар партияһы сафына алалар, уның исеме частың почет кенәгәһенә яҙыла. Ябай һалдат өсөн был иң ҙур баһа.

1977 йылда хеҙмәтен тултырып ҡайта Фәрит. Башҡа бер ҙәүә булһа, бәлки, ҡайтып та тормаҫ ине. Сөнки хәрби училищеға барырға бик ҡоҙалайҙар, часта контракт буйынса ҡалырға тәҡдим итәләр. Ризалашмай Фәрит. Ауылға, тиҙерәк Түбәнге Һаҙға ҡайтырға атлыға. Ай, һағындыра шул тыуған яҡ сит ерҙәрҙә йөрөгәндә. Өҫтәүенә, унда уны бер матурҡай ҙа көтә (Матурҡай тигәндәй, һүҙ ыңғайында уның тураһында ла әйтеп үтәйек: әрменән ҡайтҡас, финанс-иҡтисад техникумында уҡып, Һаҡлыҡ банкының Мәҡсүт бүлексәһендә эшләп йөрөгән Әлфиәгә өйләнә Фәрит.Ике бала үҫтерә улар).

Етәкселек шулай башлана…

Һалдат кейемен дә сисмәгән көйө Фәрит партияның район комитетына иҫәпкә баҫырға килә. Иҫәпкә алалар уны һәм ҡайҙа, кем булып, нисек хеҙмәт иттең, партияға ҡасан алындың, тигәнерәк һорауҙарҙан һуң уны райкомға эшкә алырға уҡ булып бөтәләр. Әммә Фәрит шунда уҡ ризалашмай. Райкомдан сығып барһа, ҡаршыһына үҙенең элекке совхоз директоры Хәлитов осрай. Егет менән күрешеп, уның ниндәй йомош менән йөрөгәнен белешкәндән һуң, уны етәкләп тигәндәй беренсе секретарь Пономарев бүлмәһенә алып инә.

- Петр Николаевич, Мусинды үҙебеҙгә совхозға алып ҡайтам. Элекке эшен - комсомол секретары вазифаһын башҡарып торор. Шунан бүтәнен дә табырбыҙ. Йәш коммунисҡа шунан да ыңғайы булмаҫ. Райкомда эшләп өлгөрөр әле, тием.

- Мин ҡаршы түгел. Үҙе нисек уйлай һуң?

- Ауылға ҡайтам. Ауыл тип әрмелә лә ҡалманым бит.

Шулай итеп, Фәриттең юлы Үргe Һаҙға кире борола. Дөрөҫөрәге, Үргe Һаҙҙа йәшәй, көн һайын Мәҡсүткә эшкә йөрөй. Арҙатта эшләгән саҡта биштә тора башлағайны бит, шулай дауам итә.

"Октябрь" совхозы директоры Хәлитов Фуат Салауат улы райкомда тура килтереп кире ауылға алып ҡайтҡаны бирле Фәрит Үргe Һаҙ ауылында йәшәй, Мәҡсүткә йөрөп эшләй. Башта комсомол секретары, шунан мал аҙығы етештереү буйынса директор урынбаҫары була. Недорезков Владимир Дмитриевич совхоз директоры итеп тәғәйенләнгән саҡта ул тап шул вазифаны үтәгән була. Яңы директор хужалыҡ менән танышып, кешеләр менән күрешеп сыҡҡас, Мусинды саҡырта.

- Фәрит Мырҙагилде улы, мин һеҙгә Арҙат бүлексәһенә идарасы булып күсергә тәҡдим итәм...

Фәрит аптырабыраҡ ҡала.

- Һуң... минең ауыл хужалығы белемем дә юҡ бит. Мин бит физкультура уҡытыусыһы. Әллә нисә мең гектар һөрөнтө ере, меңдән ашыу эре, ваҡ малы булған, биш ауылды берләштергән бүлексәгә мин ниндәй идарасы була алам, ти?

- Белемдең булмауы, әлбиттә, насар. Ә былай һеҙҙең ҡулдан килеренә минең шигем юҡ.

- Иң артта һөйрәлгән Арҙат бит...

- Ана шул арттағыны алға сығарыр өсөн был эште һеҙгә тәҡдим итәм дә инде. Бергәләп күтәреребеҙ. Уйлар өсөн бер тәүлек ваҡыт һеҙгә. Иртәгә күрешербеҙ.

Эштән ҡурҡа торғандарҙан түгел Фәрит. Әммә бында бит хәл икенсе, ҡырҡ атаның балаһы йыйылған, етмәһә. Башҡорто ла, мордваһы ла, урыҫ менән татары ла, мишәре лә бар. Шуларҙы бер төптән егеп эшләтеп ҡара. Атаһы менән һөйләшә Фәрит. Мырҙагилде ҡарт һаман үҙенекен тылҡый:

- Урлама, алдама, үҙеңдән элек кешене ҡайғырт. Үҙеңде кеше урынына ҡуйып ҡарап, уның хәленә ин. Шул саҡта барыһы ла ыңғай булыр. Бар. Һинең кеүек ирҙәр ҙә тотонмаһа, ул совхозды кем күтәрер?

тормош

Тәүге аҙымдар

Тәүәккәлләй Фәрит. Инде иртәнге биштә егелгән ат Мәҡсүткә бармай, Арҙатҡа борола башлай. Ауыр бүлексә була Арҙат. "Октябрь" совхозында барлыҡ хеҙмәт күрһәткестәре буйынса ла иң арттағыһы. Етмәһә, эскелек, һуғыш, йоғошло сирҙәр йәһәтенән совхозда ғына түгел, районда иң "алдынғыларҙың" береһе. Совет хужалығы ойошторолғаны бирле Арҙатҡа эшкә белгестәрҙе төрлө яҡтарҙан һөргөнгә ебәргән кеүек ебәргәндәр. Фәрит Мусинды ла һөргөндә тиер инең, күренеп торған ғәйебе юҡ һымаҡ, тип фекер ҡора ауыл кешеләре. Бүлексәне күтәреү мөмкин булмаған эш һымаҡ тойола барыһына ла. Ярар, ыҙаланыр-ыҙаланыр ҙа, ташлар әле, тиҙәр. Әммә Фәрит үтә ныҡышмал, ҡаратырыштарҙан булып сыға. Ысынлап та, бүлексәне иң алдынғы итергә һүҙ бирә ул. Кешегә түгел, үҙенә. Үҙеңә бирелгән вәғәҙәне үтәмәүҙән дә насар нәмәнең булыуы мөмкин түгел. Үҙеңде үҙең алдай алмайһың.

Тәүҙә яңы эште үҙе белгән комсомол, әрме тәжрибәһенә таянып эшләп ҡарай. Әммә килеп сыҡмай. Шул саҡ, бүтәндәр ҡайһылайта икән һуң, тигән һорау тыуа. Туҡта, Баһаповҡа барып ҡарайым. Күрше Дәүләткол бүлексәһендә идарасы булып Баһапов тигән һуғыш ветераны, ҡарт крәҫтиән эшләгән була. Оло кеше йәш коллегаһының хәстәрен һәм хәсрәтен аңлай. Яйлап ҡына үҙенең эш алымдары менән таныштыра. Комсомолдағы кеүек, йыйылыш ҡороп, ярыш иғлан итеп кенә булмай икән шул. Әлбиттә, улары ла кәрәк. Әммә, иң мөһиме, һәр кешенең күңеленә нуҡмаҡ һалыу. Кеше ҡайғыһын, кеше шатлығын үҙендеке итеп күрә белеү. Етешһеҙлекте,

ЕТӘКСЕҺЕНЕҢ...

ҡанундары

әгәр ҡара ниәттән яһалмаһа, ғәфү итергә лә мөмкин.

Фәрит Мусин эшкә килгәндә Арҙатта урлашыу көслө була. Ырҙын табағының орлоҡ келәтендәге ашлыҡ күҙгә күренеп кәмеүгә китә бер саҡ. Ишектә йоҙаҡ та, ҡапҡа төбөндә ҡарауылсы ла бар. Ярҙам итмәй. Бер көндө кис ҡараңғы төшкәс, Фәрит келәт янына килә лә мөдиргә: "Мине тыштан биклә, - ти. - Тик был турала ләм-мим". Йоҙаҡ шартлап бикләнә, аяҡ тауыштары тына. Тағы бер аҙҙан тышта ҡыштырлау ишетелә. Ике кеше шыбырлап һөйләшә-һөйләшә келәт ҡапҡаһындағы аҫҡы таҡтаны һурып ала ла шыуышып эскә үтә. Ҡараңғы. Тегеләр һөйләнә-һөйләнә орлоҡ игенен тоҡтарға тултырып, баяғы тишеккә һөйрәй башлай. Шул саҡта иген өҫтөндә ятҡан Фәрит ҡысҡырып ебәрә, тегеләр йығылыша ла ҡуя. Ҡурҡыуҙан йөрәк-фәләндәре шартлап ҡуймаһын, тип, Фәрит үҙе лә шөрләй. Иртәгәһенә бурҙар халыҡ алдында фашлана. Быны бүтәндәргә һабаҡ өсөн кәрәк була. Милицияға яҙып-фәлән тормай Фәрит. Уларҙы ултыртыуҙан фәтеүә юҡ бит, уғрылыҡты ҡоротоу кәрәк.

Кәмей төшә урлашыу, әммә бөтмәй. Көҙ еткәс, иң киң таралған уғрылыҡ яландағы өлгөргән көнбағышты һуғыу була. Ҡарауылсы ла ҡуйып ҡарайҙар, менгеһе менән һаҡсы ла булдыралар, файҙа юҡ. Тота ла алмайҙар, бурлыҡ та бөтмәй. Бер көндө эҙер мәлендә Фәрит "Москвич"ы менән көнбағыш баҫыуына китә. Ялан ситенә еткәс, ул водителенә машинаны бер аҙ яйлатырға ҡуша һәм үҙе әкрен генә төшөп ҡалып, көнбағыш араһына йәшеренә. Йәшеренеп ултырып күп тә үтмәй, туғайҙа кесерткән араһында тауыш ишетелә.

- Киттеме теге?

- Эйе, китте. Анна, машинаһы тауға менеп бара.

- Ярар. Тотонайыҡ.

Өс кеше көнбағыштың башын ҡырҡа ла тоҡҡа тултыра. Инде һауыттары тулып, тоҡтарҙы туғайға өҫтөрәй башлағанда ғына эргәләрендә мылтыҡ шартлай.

- Тоҡтарығыҙҙы ташлағыҙ, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ!

Ҡараһалар - Мусин. Иртәгәһенә бүлексә идараһының иғлан таҡтаһына стена гәзите эленә. Тоҡ күтәргән өсәү бөксәңләп атлай, арттарынан берәү мылтыҡ тотоп килә. Һәр һүрәттең аҫтына фамилияһы, исеме ҡуйылған. Шунан да нығыраҡ ояттың булыуы мөмкинме? Ошоноң менән сикләнә Мусин, милицияға ғариза яҙып тормай.

Быны шулай, Мусин ҡулланған эш алымдарының барыһы ла дәүләт байлығын һаҡлау, тәртип урынлаштырыу, шулай уҡ кешеләргә ярҙам итеү була. Ул бүлексәләр эшләй башлағас та мал фермаларының һәр береһендә йылы һыу булдыра, душ ҡуйҙыны эшкә саҡыралар. Өфөгә китер алдынан Недорезков Мусинға килә һәм:

- Үҙемдең урынға директор итеп һине тәҡдим итәсәкмен, - ти.

- Ышанысығыҙ өсөн рәхмәт. Әммә мин унда бармайым, - ти Фәрит Мырҙагилде улы. - Ул ҡәҙәре ауыр йөктө тартырлыҡ көс тоймайым үҙемдә...

Төрлөсә өгөтләп ҡарай уны Недорезков, хатта үпкәләп тә бөтә, әммә күндерә алмай. Недорезков китә, Фәрит Арҙатта ҡала, институт бөтөрә. Арҙат бүлексәһе совхозда ғына түгел, районда ла алдынғы булып ҡалыуҙы дауам итә. Бына шулай, Фәрит үҙенә үҙе биргән вәғәҙәне үтәй. Вәғәҙәнең үтәлгәнен, идарасының юғары белем тураһындағы диплом алғанын ғына көткән кеүек, тап ошо ваҡытта "Октябрь" совхозында йәнә директор вазифаһы бушай. Был урынды тағы Мусинға тәҡдим итәләр. Был юлы ризалаша Фәрит һәм йөҙөп эшләп алып китә.

Тик заманалар ныҡ үҙгәргән була шул. Недорезков уға был вазифаны тәҡдим иткән саҡта ауыл хужалығы илдең иғтибар үҙәгендә ине, ә Мусин директорлыҡты ҡабул иткәндә иһә был тармаҡ илдең етем балаһы рәүешенә төшкәйне. Ярар ҙа, республика Президенты ауылдарҙың юҡҡа сығыуына юл ҡуйманы. Әммә барыбер ауыр ине ауыл хужалығына. Хужалыҡтар бары үҙ көсөнә генә таянып йәшәргә тырышты. Тирә-яҡ бөлгөнлөк хәленә ҡалып, ҡоро таяҡҡа таянғанда, Мәҡсүт һәм уның тирәһендәге ауылдар тын ала, үҙҙәрен үҙҙәре ҡарай ине әле. Фәрит Мусин ауылды наҡлап ҡалырға тырышты. Шуға күрә "Октябр"ҙең ер һөрөп сәсергә тракторы булды, һөт ауырға ныйыры ҡалды. Рәсәй тигән илдең ҡап-ҡара күк көмбәҙендә йондоҙ ҡабыҙҙы тип үк әйтеп булмаһа ла, шул ҡараңғылыҡта ла Мәҡсүт тирәһендә сыранан төшкән хәтлем булһа ла ут ҡалды, кешеләр күңелендә өмөт йәшәне.

Хакимиәт башлығы булғаны

2007 йылда Фәрит Мусинды Күгәрсен районының хакимиәт башлығы итеп тәҡдим итәләр һәм Президентҡа саҡыралар.

- Һине бығаса район башлығы булып эшләгәндәргә оҡшамаған тиҙәр. Дөрөҫмө шул?

- Бәлки... Мин кеше алдамайым һәм араҡы эсмәйем. Шуны әйтәләрҙер.

- Быныһы зыян түгел, файҙаға. Әйҙә, эшлә. Кемлегеңде күҙ күрер...

Төрлөһө була. Эш башлап, бер нисә ай үтеүгә ошаҡсылар нахаҡ бәлә яғалар, саҡ аҡлана Мусин. Шунан һуң ышаныс дәүере китә. Беренсе Президенттың уға ҡарата шик-шөбһәһе ҡалмай. Республикаға яңы етәксе килә. "Яҡшылыҡ теләүселәр" йәнә шыбырлап өлгөрә: элекке Президенттың кешеһе ул. Тағы аңлашырға тура килә. "Мин кемдеңдер кешеһе түгел, мин эш кешеһе. Минең уйым кемгәлер ярау түгел, район халҡына яҡшы булһын тип тырышыу", - ти Фәрит. Һынау оҙаҡ ҡына бара, шунан тағы ышаныс дәүере китә.

Ә район теге саҡта ла, әле лә тыныс, һәүәтемсә йәшәй. Райондың ябай кешеләре генә түгел, хакимиәт башлығының янында йөрөгәндәр ҙә ниндәйҙер көсөргәнеш барлығын һиҙмәй. Бары тик эшлекле мөнәсәбәттәр, эшлекле мөхит, эш булһын тип яныу ғына.

Партия ваҡытында ла, әле лә кешене етәксе итеү өсөн уҡытырға тырышалар. Тырышалар, тибеҙ, сөнки уҡытыу етәкселек эшенең ябай ғына нескәлектәренә өйрәтеүгә ҡайтып ҡала. Ҡалғанын тормош үҙе уҡыта. Фәрит Мусинды ла етәксе итеп бергә ҙә уҡытмай. Ауыл хужалығы институтында иҡтисадҡа өйрәтәләр, әммә кеше менән эшләүгә түгел. Быларына ул Арҙат менән ямаҡлығы ла күренә. Кешеләрҙең сәләм биреү-бирмәүенән уларҙың тәрбиә кимәлен самалай. Кемдер туҡтап, хәбәрен һөйләһә, ауылдың тын алышын тоя.

Шишәмбе көндө район башлығы хакимиәт хеҙмәткәрҙәре менән Күгәрсен районы ауылдарында кешеләрҙе ҡабул итә. Ә кесаҙнала райондың барлыҡ етәкселәре лә ниндәйҙер бер ауылда ыңғай йә кире эш тәжрибәһен өйрәнә. Әйтәйек, Теләүембәт ауылында мал ҡышлатыуға әҙерлекте ҡарайҙар икән, ти. Унда ауыл хужалығы идаралығы, район больницаһы, райондың банкылар етәкселәре лә, мәктәп директорҙары ла, ауыл советы рәйестәре лә йыйыла. Һөйләшеү үҙәге мал ҡышлатыу тураһында булһа ла, банкир кәрәк. Сөнки кредит алыу, уны кире ҡайтарыу тураһында һорауҙар тыуасаҡ. Мәктәп директорҙары кәрәк. Сөнки балалар йәйен бесәндә эшләне, ҡышын фермаға ярҙамға барасаҡ. Һорауҙар тыуасаҡ. Мал ҡышлатыуҙы кешеләр тәьмин итә. Уларҙың һаулығы больница эшмәкәрлегенә бәйле. Һорауҙарға яуаптар кәрәгәсәк... Ошо рәүешле һәр мәсьәлә күмәкләп хәл ителә, өҫтәүенә, күп кеше алдында бирелгән вәғәҙәне үтәмәй ҡалыу оят бит.

Районда 113 ауыл. 113-дә лә әлегесә йә кешеләрҙе ҡабул итеү, йә ниндәйҙер мәсьәләне тикшереү ойошторола. Ауылдарҙың ҙуры ла, бәләкәйе лә ситтә ҡала алмай. Сөнки һәр ерҙә лә кешеләр йәшәй.

Быларҙан тыш, район башлығы аҙна һайын граждандарҙы ҡабул итә. Бүтән урындарҙағы һымаҡ, ҡабул итеү сәғәт 11-ҙә, йә 2-лә түгел, ә 7-лә башлана. Сөнки ауыл кешеһе иртә тора бит, 7-гә Мораҡҡа ла килеп етә ул. Мәсьәләһен хәл иткәс, кире ҡайтып, эшен эшләргә лә ваҡыты ҡала. Ҡабул итеүгә барам, тип, ниңә көнөн әрәм итергә тейеш әле ул?

ШУЛАЙ ИТЕП...

Мусин район хакимиәте башлығы булып эшләй башлағас, лаҡап тараталар. Имеш, башлыҡ яңы вазифала ваҡытын нисек үткәрергә белмәгәс, мәктәптәргә йөрөй. Эйе, ул әле лә мәктәптәрҙә йыш була. Сөнки ауылдың киләсәге ошонда ярала. Нимәгә өйрәтәләр дәрестәрҙә, нисек уҡыталар, атайәсәйҙәр ни теләй - шуны белергә теләй ул. Район башлығы мәктәптәрҙә хеҙмәткә өйрәтеү эшен аяҡҡа баҫтырыуҙы талап итте. Хәҙер һәр мәктәптә лә производство участкалары бар. Мәктәптәр үҙҙәрен үҙҙәре йәшелсә менән тәьмин итә. Бынан тиҫтә йылдар элекке кеүек, Күгәрсен районы мәктәптәрендә малайҙар тракторға, ҡыҙҙар мал ҡарау, тегеү-сигеү эшенә өйрәтелә. Күгәрсен районы ЕГЭ буйынса алдынғылыҡты тотҡан төбәктәрҙең береһе. Юғары уҡыу йорттарында уҡыусы студенттар һаны буйынса ла был районға етеүсе һирәк. Тағы бер мөһим мәғлүмәт: Күгәрсендә оптималләштереү һылтауы менән бер генә мәктәптең дә ябылғаны юҡ. Бөгөн бар халыҡты мәғариф системаһындағы реформалар борсоғанда, урындағы етәкселәрҙең был эшкә ҡыҫылыуы, ул үҙгәрештәрҙе ыңғайға көйләргә тырышыуы - үҙе маҡтауға лайыҡ түгелме ни!

Ғәлим ХИСАМОВ.

✓ ***Бер көндө, аптырағандан, Рәүеф ишекте эткәйне, бәй, асылды китте! Элекке һымаҡ шығырламаны ла хатта. Был ни хәл, нишләп бикле түгел һуң? Ғәжәпләнеүенең иге-сиге булманы.***

Әмир ӘМИНЕВ

ЙӨНДОҘ СӘСКӘ

Повесть

Шунда Рәүеф торҙо:

- Хәбибуллин, һеҙ беҙҙең мәктәпкә бына нисә тапҡыр киләһегеҙ - килгән һайын һоранып та ялбарып. Үҙ мәнфәғәтегеҙҙә. Ә былай аяҡ та баҫмаҫ инегеҙ. Сөнки әпәт һораналар, талап итәләр, шулай бит? Ҙурҙан ҡупҡанда, эш бит бында Ғәлим Мөхәмәткәримович күтәргән мәсьәләләрҙә лә түгел. Беҙ нығыраҡ булһаҡ, һеҙ гел генә ҡаршы төшмәһәгеҙ, ауыл хакимиәте ярҙам итһә, автобусты ла, ремонтҡа аҡсаһын да табып була. Бында эш демократик принциптар боҙолоуҙа, мәктәп коллективына баҫым яһауҙа, халыҡты һарыҡ итеп күреүҙә. Үҙәктән күрмәксе, республика, район, ҡала кимәлендә лә власть органдары, шул иҫәптән һеҙ ҙә, Хәбибуллин, ябай ер кешеһен сүп күреп ҡарауҙа. Һоро масса, пластилин - нисек теләйем, шулай әүәләйем, тип.

- Рәүеф Рәшитович, һеҙ ябай ғына мәсьәләне үтә ҡатмарлаштыраһығыҙ. Үҙәк өсөн мин яуап бирә алмайым, минең компетенцияла түгел, үҙем, күреп тораһығыҙ, район мәктәптәре тип йән атып йөрөгән кеше. Ярай әле, һаулыҡ бар, спорт менән шөғөлләнеү ярҙам итә, юҡһа, һеҙҙең алда хәлем бөтөп йығылыр инем.

- Харап ҡына була күрмәгеҙ инде. - Ғәлим мыҫҡыллы көлдө. - Халыҡты зар илатырһығыҙ.

- Һеҙ, һәр ваҡыттағыса, бөгөн дә яуаптан ҡасаһығыҙ, Хәбибуллин. Етди йыйылышты шоуға әйләндереп, халыҡтың аңын томалайһығыҙ. Һеҙ власть фирҡәһенә тауыш биргә өгөтләргә килгәнһегеҙ, тимәк, беҙ, ошонда ултырған уҡытыусылар, үҙебеҙ тауыш биреүҙән тыш, ауыл халҡын да шуға өгөтләргә тейеш булабыҙ, шулаймы?

- Рәүеф Рәшитович, сөнки уҡытыусы - ауыл интеллигенты, алдынғы ҡарашлы, сәйәси яҡтан аныҡ позицияһы булған идеология фронты һалдаты. Һәр командала лидер була, бына һеҙ ауылда лидер, капитан. Эйе, һеҙҙең айырым фекерегеҙ булыуы ихтимал, ләкин власть фирҡәһе үҙенә тауыш биреүҙе талап итә икән, һеҙ уға буйһонорға тейеш.

- Нисек буйһонорға? Мин бит фирҡә ағзаһы түгел. Шуға күрә ул мине һис мәжбүр итә алмай.

- Ағзаһы булмаһаң ни, һин ошо илдә йәшәйһең, фирҡә ил етәксеһе булараҡ ҡуша.

- Это мы уже проходили, Хәбибуллин. Буйһоноп күп йәшәнек һәм уның нимәгә килтергәнен бик яҡшы беләбеҙ. Ярай, теорияға бирелмәйек, ергә төшәйек. Бына беҙ, агитаторҙар, ауыл халҡын йыйып, һеҙҙең фекерҙе алға һөрә башлаһаҡ, улар шундуҡ әлеге лә баяғы күпер, балалар баҡсаһы, медпункт һораясаҡ, күрше ауылдар балаларын беҙҙең мәктәпкә йөрөтөр өсөн автобус талап итәсәк. Уларға "Берҙәм ил" дә, "ғәҙел"дәр ҙә, коммунистар ҙа, "алма"лар ҙа түгел, ә мин һанаған көн дә кәрәкле иң ябай уңайлыҡтар кәрәк. Улар сәйәсәттән алыҫ, ниндәй депутат һайланһа ла ярай, тик әлеге һораған уңайлыҡтарҙы эшләһен. Ә беҙ нимә тип яуапларбыҙ уларҙың һорауына? Хәбибуллин вәғәҙәләй, типме? Халыҡ буш вәғәҙәләрҙән туйҙы, "Берҙәм ил" рулдә күпме ултыра, берәй нәмә үҙгәрҙеме? Егерме йыл элек нисек йәшәһәк, һаман да шул кимәлдә.

- Да, һеҙҙең дәғүәләргә ҡаршы тороу ҡыйын, Рәүеф Рәшитович, болғауыс инегеҙ, һаман да шулай икәнһегеҙ.

- Нисек бар - шулай инде, Хәбибуллин. Һеҙҙе лә үҙгәртеп булмай бит. Халыҡҡа, ниндәй әсе булһа ла, хаҡты әйтергә кәрәк, алдарға, күҙ буярға ярамай. Бер алдаһаң, икенсе ваҡыт ул һиңә ышанмаясаҡ. Шуға күрә халыҡты хәҙер "Берҙәм ил" өсөн өгөтләүҙән файҙа булмаҫ, сөнки власть, шул иҫәптән һеҙ ҙә, халыҡ алдында ышанысты юғалттығыҙ.

- Һайлауҙарҙан һуң хәл ҡырҡа үҙгәрәсәк, - тине Хәбибуллин.

- Үҙгәрмәйәсәк, уға нигеҙ юҡ, предпосылка. Барыһы ла сираттағы пиаркампания...

Бына шул рухта башланып, шул рухтараҡ барҙы һүҙ ул осрашыуҙа. Әлбиттә, бүтән мәсьәләләр ҙә күтәрелде, Ғәлим, мәктәп директоры, башҡа уҡытыусылар ҙа һөйләне, талап итте, туған телде уҡытыу, милләт, мәктәп, ауыл яҙмышы, уҡытыусыларҙы штаттан ҡыҫҡартыуҙар, БДИ, хеҙмәт хаҡтарының наҡыҫлығы һымаҡ мәсьәләләр ҡалҡып сыҡты. Элекке физкультура уҡытыусыһы күпселек һорауҙарға яуап таба алманы: был һиңә туп һуғыу, йүгереү йәки һикереү түгел - асыҡлармын, һорармын, белешермен, тиеү менән сикләнде. Һуңынан хатта, мәсьәләләрҙең сиселеш-үтәлеше һеҙҙең, ауыл халҡының һайлауҙарҙа нисек тауыш биреүенән тора, тип әйтеүҙән дә тартынманы. Осрашыу тамамланғас, сәхнәнән төшөп, директор кабинетына йүнәлгәндә, Рәүефте үҙе артынан әйҙәп индерҙе лә "Күрһәтермен әле мин һиңә! тип ыҫылданы. "Бәй, мин генә түгел, барыһы ла шул уҡ хәбәрҙе һөйләне лә", - тип бер ҡатлыраҡ яуаплағайны ла, "Ә һин тәрәнерәк һөрәһең, нин башланың, тимәк, ойоштороусыһың, тимәк, беҙгә ҡаршы" тип ҡаҙарынды... Бына шул "тәрәнерәк һөргән"е өсөн үс алғандыр ҙа Хәбибуллин Рәүефтән.

Власть фирҡәһе ауылдан барыбер үтмәне - һөҙөмтәлә районда хакимиәте уларҙың биләмәһенә яуаплы итеп тәғәйенләгән мөдирҙе эшенән алды. Мәктәбенә физкультура уҡытыусыһы булып кире ҡайтырға мәжбүр булды элекке түрә. Үсләшеп, ярыштарҙа төрлө юлдар менән ҡамасаулап, быларҙы нисек тә артта ҡалдырырға тырышып йөрөй әле лә... Кем белә, Рәүефтең бында ябылыуында уның ҡыҫылышы ла юҡтыр, бәлки, - аптырағандан фараз итеүе инде...

* * *

Бетон нигеҙҙең үрмәксе ауы ише төрлө ерҙән ярылыуына ғәжәпләнә Рәүеф. Ул, өңгән, аҫҡа төшкән һайын, күҙгә күренеп тармаҡлана һәм киңәйә бара. Соҡор ҡаҙған яҡлап ҡына түгел, дүрт яҡлап та. Өй хатта сүккән дә һымаҡ. Ә бер көн йәнә һөйәк килеп сыҡты. Уны өҫкә ырғытып, көрәген йәнә төрткәйне, ап-аҡ баш һөйәгенә юлыҡты. Быны алырғамы-юҡмы, күтәрһәм аҫтан тағы килеп сыҡмаҫмы, тип шөрләп тора ине, йәнә бер һөйәк шәйләнде. Уныһы әллә тупраҡ аҫтынан табылды, әллә нигеҙ эсенән тәгәрәп төштө - Рәүеф аңғарманы. Юҡ, былай булмай, сығырға кәрәк, тип тубыҡланған көйө боролдо ла, таянып, аяғына баҫты. Көрәнен менән көрәген ергә төрткәйне, тоҡ бүҫелеп, игене ҡойолған һымаҡ, соҡор төбөнән шауҙырлап һөйәктәр өҫкә ҡалҡып сыға башланы. Баш һөйәктәре, ҡабырғалар, аяҡ, ҡул суктары. Көтөлмәгән был ғәләмәттән Рәүеф шаңҡып ҡалды, кәүҙәһен дә ҡуҙғата алмаҫлыҡ хәлгә килде, аңһыҙҙан батҡаҡҡа йәки шыйыҡ тиҙәккә баҫҡандағы ише, әле бер аяғын, әле икенсеһен күтәрҙе. Аяҡтарын алыштырғанда мәтегә түгел, утын ярҡалары ише тәртипһеҙ рәүештә ыуалып-таралып ятҡан серек һөйәктәргә баҫты. Баҫҡан һайын, ташҡын һыу кәмәне өҫкә күтәргән һымаҡ, һөйәктәр өҫкә күтәрелә барҙы, күтәрелә барҙы. Шулар араһында күмелеп ҡалыу ҡурҡыныһы тыуҙы, шуға ла туңҡанлап соҡорҙан баҙға күтәрелде. Артына боролғайны, соҡорҙоң һөйәктәр менән тулғанын шәйләне. Һөйәктәр үҙе соҡоған соҡорҙоң төбөнән түгел, ә бетон нигеҙҙең ярыҡтарынан сығa тиһә, нигеҙ үҙе шау һөйәктән тора һәм ул, шығырҙай-шығырҙай, яйлап төрлө урындан ярыла, ишелә, ватыла һәм һөйәккә әүерелә бара, имеш.

- Сәғиҙә! - тип һөрәнләп ебәрҙе Рәүеф, был күренештән ҡото алынып. Ҡурҡыуы шул тиклем ҙур ине, "Рәүфә" тимәне, ҡатынының исемен атаны. - Нигеҙ емерелә, нигеҙ! - Үҙе ултырған көйө асыҡҡа, баҙ ҡапҡасына, шыуыша.

- Сыҡ тиҙерәк! Иҙән һелкенә, стеналар ҡуҙғала башланы... Күмелеп ҡалаһың хәҙер, сыҡ, тим! - тип асырғанып һөрәнләй Рәүфә.

Ә Рәүеф ҡалҡына алмай хитлана. Аяҡ-ҡул быуындары ҡамырға әйләнгән дә ҡуйған. Шунан бар көсөн йыйып, көскә тубыҡланды - өйҙән баҫылып ятып ҡалғыһы килмәй ҙәһә - дүрт тағанлап, тәнтерәкләп баҙ ауыҙына саҡ килеп етте. Йәнә артына боролһа, ул соҡоған яҡтың ғына түгел, дүрт яҡтың да нигеҙе ҡуҙғала, ярыла, ишелә... Күҙгә күренеп өй аҫҡа сүгә, аҫҡы бүрәнәләр шомло шығырҙай. Рәүеф баҫҡыстың иң аҫҡы таҡтаһына түгел, ҡабаланып, иң өҫтәгеһенә баҫты, йәнәһе, тиҙерәк сыға, күтәреләйем тип ерҙән этәнеүе булды, баҫҡыс шыуып китеп, ул баҙ эсенә ҡолап төштө.

- Мен тиҙерәк! - тип һөрәнләне йәнә Рәүфә. - Хәҙер иҙән аҫтында ҡалаһың бит! - Ҡулын һондо.

Рәүеф ҡалҡынды ла йәнә баҫҡысҡа тотондо һәм Рәүфәнең ҡулына йәбешеп, ниһайәт, өҫкә сыға алды. Ул күтәрелгәнсе, дүрт яҡ нигеҙ ҙә тамам емерелеп, һөйәктәр баҙҙы тултырғайны инде. Өҫкә ҡалҡа күрмәһендәр тип, баҙҙың ҡапҡасын яптылар ҙа икәүләшеп өҫтөнә баҫтылар.

Байтаҡ торҙолар шулай, әммә һөйәктәр ҡапҡасты төртмәне, өҫкә сығырға маташманы, иҙән шылыуы ла баҫылды, стеналар ҙа ишелеүҙән туҡтаны...

Ул төн йоҡлай алманылар. Мейес емерелеп төшөр тип, кистән яҡманылар - төнөн һыуыҡ булды. Йоҡламауҙары өшөүҙән генә түгел, ҡурҡыуҙан ине. Уфтанышып, ауыр машиналар уҙҙы, ҡайҙалыр эт олоно...

Таң атҡас, йорттарының нигеҙе бөтөнләй емерелгәнен, бүрәнәләренең ерҙә лыпа ултырғанын шәйләнеләр - элекке бейек тәҙрәләр ныҡ түбән төшкәйне. Бәшмәк йыйған теге малай йәнә килһә, ерҙә баҫып торған көйө генә эсте байҡай аласаҡ. Емерелер, хәҙер емерелер, тип ҡурҡып, байтаҡ тик кенә ултырғайнылар ҙа, өй емерелмәне, стеналар таралманы, мөйөштәр ысҡынманы. Әммә хәүеф бар, ул бөтмәгән һәм уның тәүлектең теләһә ҡайһы мәлендә ҡабат ҡубыуы ихтимал.

Артабанғы көндәр шулай уҡ борсолоуҙарҙа үтте. Бер ултырҙылар, бер йөрөнөләр, аптырашып, тәҙрә төбөндә баҫып торҙолар. Рәүфә иланы, ҡарынындағы бала өсөн борсолдо, йыш ҡына Рәүефкә асыуланды. Рәүеф тә бала өсөн борсолдо, Сәғиҙәһе, малайы, ҡыҙы менән хушлашып-бәхилләшеп бөттө, тормошоноң шулай үтә аяныслы осланасағына әсенде.

"Ҡара ҡарға" инмәне, ризыҡ та наҡыҫланды, бидондағы һыуҙары ла аҙайҙы. Өйҙә өсөнсө йән эйәһе булған ҙур ҡара себен мөйөштәге үрмәксе ауына эләкте, баҡсалағы йондоҙ сәскә һулыны, өйҙәре һыуынды - мейес башындағы сей утын оҙаҡҡа барманы.

Бер көндө, аптырағандан, Рәүеф ишекте эткәйне, бәй, асылды китте! Элекке һымаҡ шығырламаны ла хатта. Был ни хәл, нишләп бикле түгел һуң? Ғәжәпләнеүенең иге-сиге булманы. Нигеҙ таралып төшкәндә, ишек ҡайырылып китеп, йоҙаҡтары йолҡоноп сыҡҡанмы? Әллә һаҡсы бикләргә онотоп киткәнме? Рәүеф һағайып ҡына тышҡа сыҡты, тикшерҙе - йоҙаҡтар юҡ, ә ишек төҙөк, ҡайырылғанҡыйшайған ере күренмәй. Ғәжәп һәм сәйер ине ишектең шулай бикһеҙ тороуы.

- Рәүфә, ишек асыҡ таһа! - Үҙ-үҙен белештермәй һөрәнләне Рәүеф.

- Асыҡмы? Булмаҫ! - Ишеккә арты менән диванда ултырып нимәлер ямаған ҡатын, эшен ташлап, йүгереп килеп тә етте. - Ә һаҡсы ҡайҙа?

- Күренмәй.

- Ҡасан асып китте икән һуң? Йоҙаҡ тауышы ишетелмәне ләһә?

- Кем белә инде? Ишетелмәне шул. Ә йоҙаҡтар юҡ.

- Улайһа, беҙ иректәме?

- Ҡабаланма. Тикшерәйек, ҡарайыҡ әле. Ҡапыл килеп сыҡһа, ирек булыр һиңә.

Тирә-яҡҡа ҡарана-ҡарана, һаҡ ҡына баҫып, өйҙә уратып сыҡтылар. Бәҙрәфте тикшерҙеләр. Һаҡсы юҡ ине. Вышкалағы күҙәтеү пунктында ла, мунса тирәһендә лә күренмәне. Киткәндер, посты алғандарҙыр - үҙҙәренә инмәүенән, төндә-

рен өй уратып йөрөмәүенән уның юҡлығын шәйләгәйне инде Рәүеф. Ниңә элегерәк ишекте төртөп ҡарамаған - бына хикмәт. Юҡлығын һиҙенгәс үк асып ҡарарға тейеш булған да бит...

Төнөн йәнә ҡар яуған, тирә-йүн ап-аҡ, эҙ-маҙар юҡ. Ҡыйыҡ башындағы ҡыҙыл флаг теткеләнеп, селтәргә әйләнгән, бына-бына таяғынан ысҡынып таралырға етешкән. Өйҙәре, ысынлап та, ерҙә ултыра, бетон нигеҙ юҡ һәм аҫҡы ике-өс ниргә ҡайһы аралалыр серей ҙә башлаған. Йәнә ишек алдына килеп, тирә-яҡҡа, унан аптырашып бер-береһенә ҡараштылар. Үҙҙәренең азат икәнлектәренә һаман ышанмайҙар ине.

- Нишләйбеҙ, ҡайтабыҙмы? - тип һораны Рәүфә.

- Ҡайҙа ҡайтабыҙ?

- Бәй, өйгә инде, ауылға.

- Нисек ҡайтабыҙ, йәйәүләпме ни? Ҡайһы яҡтан килгәнеңде хәтерләйһеңме? Мин, мәҫәлән, иҫләмәйем.

- Мин дә - юҡ. Табырбыҙ. Сығып эҙләп ҡарамайынса табып булмай инде. Һаҡсы юҡ, тимәк, ҡарауыл алынған, бер нисә көн машиналар үткәне лә һиҙелмәне. Бынан тиҙерәк ысҡынырға кәрәк. Яңынан пәйҙә булмаҫтары элек.

Рәүеф Рәүфә менән килеште. Ысынлап та, һаҡ юҡ икән, нимә тип бында ултырырға тейештәр? Эйәртенешеп инделәр ҙә, булған ғына кейемдәрен кейеп, кире сыҡтылар.

- Урман ауыҙына барайыҡ, юл шунда бит, - тине Рәүфә.

Ләкин унда бер ниндәй ҙә юл юҡ ине. Ҡасандыр булған ул, үләне тапалып, батыбыраҡ ята, әммә ҡар өҫтөндә бер кемдең дә эҙе юҡ. Урман эсенә инделәр. Унда ҡар, ни ғәләмәттәндер, ҡалыныраҡ булып сыҡты - тубыҡтан. Барҙылар-барҙылар ҙа кире боролорға мәжбүр булдылар, сөнки былай ҡар гөрөп алыҫ китә алмаясаҡтар. Урман эсенән машинала ярты төн, ярты көн үткәнде йәйәүләп, етмәһә, юлһыҙ ерҙән ҡар кисеп күпме генә бара алалар инде?

- Кире керәбеҙ, - тине Рәүеф, Рәүфәгә ҡарамай ғына. - Юл юҡ, был йоҡа кейемдәр, резина итек, калуш кейеп, ишшу ас көйө нисек юлға сығаһың? Хәҙер өшөп туңабыҙ. Йә аҙашабыҙ. Һин ауырлы...

- Өйҙә ятып үлдең ни, урман эсендә аҙашып үлдең ни?..

- Урманда йыртҡыс тырнағына эләгеүең бар, ә бында карауатҡа һуҙылып яттың да... вәссәләм. Хәйер, үлергә ашыҡмайыҡ әле.

- Тәҙрәләге рәшәткәләрҙе алһаң ине, исмаһам...

- Торһон, алмайыҡ, беҙгә рәшәткәһеҙ һис ярамай.

Ир менән ҡатын өйгә инде...

* * *

...Мөҙҙәте еткәс, тәбиғәт ҡанундарына ярашлы, уларҙың улдары тыуасаҡ. Әммә йылдан-йыл бүрәнәләре сереп сүгә барған ошо йорт-төрмәлә көн итеп, үҙҙәренең бер-бер артлы гүргә инәсәктәрен, егет ҡорона еткән Салауатты дөм ҡараңғы быҫҡаҡ ямғырлы бер төндә ҡара кейемле оҙон өс һаҡсының ябыҡ машинаға ултыртып, билдәһеҙ тарафҡа алып китәсәктәрен улар күҙ алдына ла килтерә алмай ине...

(Аҙағы).

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

Өфө ҡалаһының "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбленең башҡорт халҡының, шулай уҡ республикала йәшәгән башҡа милләттәрҙең дә рухи, ижади мираҫын, ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалыу буйынса ҙур эштәр башҡарғанын яҡшы беләбеҙ. Был ансамбль үҙен сит илдәрҙә танытып өлгөргән коллективтарҙың береһе. Ансамблдең йырсыһы, башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы Венера ЮЛГИЛДИНА ошондай һуңғы гастролдәрҙең береһе - Сочилағы фестивалгә сәйәхәттәре һәм үҙе тураһында һөйләй.

ХАЛЫҠ ЙЫРЫ ҒЫНА...

йырсыны йырсы итә

Һәләтем - тәбиғәттән

Мин хозур тәбиғәтле Бөрйән районында тыуып үҫкәнмен. Йөрәгемдәге моң ана шул тәбиғәттән дә киләлер. Атайым менән әсәйем сәнғәткә үтә ғашиҡ кешеләр, әммә үҙҙәре сәнғәттән алыҫ тора. Әсәйем - уҡытыусы, атайым шофер булып эшләй. Әсәйемдең атаһы Әхәт Ҡәйүм улы Сәғитов атҡаҙанған уҡытыусы, ҡурайҙа яҡшы ғына уйнаған, бик матур йырлай торғайны. Ваҡытында Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә лә саҡырған булғандар, тик ул ғаиләһен ҡалдырып, ситкә сығып китмәгән. Һәләтем унан да киләлер. Бәләкәй саҡта район мәҙәниәт һарайында "Һомайғош" тигән ансамблдә йырлап-бейеп йөрөнөм. Һәр профессиональ йырсы үткән баҫҡыстарҙы - Өфө сәнғәт училищеһын, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамланым. Тормош иптәшем, филармония ҡурайсыһы Тимур Юлгилдин менән ҡыҙ үҫтерәбеҙ.

Тамашасы мине "Башҡорт йыры" телевизион конкурсы аша таныйҙыр. Был конкурсты күптән үк ойоштороргә кәрәк булғандыр, тип иҫәпләйем. Күпме исемдәр асты ул, шуға ла артабан да үҫеш юлында булһа, яҡшы булыр ине. Халыҡ йырын башҡарыу йырсының һәләтен тағы ла асып ебәрә. Икенсе яҡтан, халыҡ хәҙер концерттарға йөрөй һалып бармай, шуға ла был конкурстың телевизион форматта барыуы уңышлы. Республикала ғына түгел, сит төбәктәрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙ ҙә уны яратып ҡарағанын беләм.

Халыҡ йырының үҙ тамашасыһы

Бөгөн күптәр башҡорт халыҡ йырының тамашасыһы юҡ, тип уйлап, ныҡ хаталана. Эстрада йырҙары, бәлки, заман талабылыр, шулай ҙа үҙен ихтирам иткән йырсы сәхнәнән халыҡ йырҙарын да башҡарырға тейеш. Сәхнә һинән ҙур профессоналлек, тырышлыҡ талап итә, шуға ла профессиональ йырсы иң тәүҙә халыҡ йырҙарын башҡарып, сынығыу үтергә тейеш. Халыҡ йырын йырлап ҡына йырсы үҙенең бар булған һәләтен, моңон күрһәтә алалыр, тип уйлайым. Бөгөнгө көндә сәхнәнән күберәк "Зөлхизә", "Сәлимәкәй" кеүек йырҙар яңғырай, халыҡ уларҙы таный, ошо йырҙарҙы һорай. Үкенескә күрә, әллә күпме йырҙарыбыҙ халыҡ иғтибарына еткерелмәгән әле. Бына ошондай һирәк йырҙарҙы эҙләп табып, өйрәнеп, тамашасы хөкөмөнә сығарған йырсыларҙы ихтирам итәм, был ҙур фиҙаҡәрлек. Ә бит халыҡ йырҙарын сит илдәрҙә лә бик юғары баһалайҙар. Бер тапҡыр шулай Италияла саҡта артистарҙы урындағы халыҡ бер көнгә өйҙәренә таратып алды. Тел белмәйбеҙ, йорттоң хужалары менән ымдар ярҙамында һөйләшкән булабыҙ. Күрәһең, концертты ҡараған булғандыр, хужабикә күҙ йәштәрен һөртөп, йырҙарыбыҙ тетрәндереүе тураһында аңғартырға маташа. "Әле һеҙ "Буранбай" кеүек киң диапазонлы йырыбыҙҙы ишетмәгәнһегеҙ, уны ишетһәгеҙ, нисегерәк ҡабул итер инегеҙ икән?" тип уйлағайным шул саҡта.

Мин үҙем башлыса халыҡ йырҙарын йырларға яратам, эстрада йырҙарын, ретро йырҙарын да үҙ итәм, улар минең репертуарымда байтаҡ ҡына. Һәүәҫкәр композиторҙар менән дә эшләйем. Бөгөнгө башҡорт эстрадаһында бер аҙ алға китеш күрәм. Бынан бер нисә йыл элек эстраданы бер көнлөк йырҙар, бер көнлөк дандан баштары әйләнгән йырсылар баҫҡайны, хәҙер ваҡыт һынауын һәм халыҡ тәнҡитен үтә алғандар ғына ҡалып бара. Шуға ла хәҙер йырсыларыбыҙ халыҡ йырҙарын да күпләп башҡара башлар, тигән өмөттәмен.

"Мираҫ" - ситтә көтөлгән ҡунаҡ

"Мираҫ" ансамбле сит илдәрҙә, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә ойоштороған фестивалдәрҙә йыш ҡатнаша. Әле бына күптән түгел ошондай сәйәхәттәрҙең береһенән ҡайттыҡ - "Сочи-2014" Мәҙәни Олимпиадаһының "Рәсәй төбәктәре марафоны"нда ҡатнаштыҡ. Унда һәр Рәсәй төбәгенең үҙенең мәҙәниәтен һәм традицияларын сағыу күрһәткән коллективтары сығыш яһаны. Сочила был фестиваль икенсе тапҡыр уҙғарыла, быйыл ул бер юлы ике сәхнәлә - Сочиның үҙендә, диңгеҙ сауҙа портының Көньяҡ Мола майҙанында һәм Лондонда, Кенсингстон баҡсаларының Russia.Sochi.Park майҙансығында барҙы. Фестивалдә беҙ Кемерово өлкәһенең "Себер калейдоскобы" хореографик ансамбле, Ҡалмыҡстандың "Аллегро" ансамбле менән бер көндә сығыш яһаныҡ. Тәүге ансамбль халыҡ бейеүҙәрен үҙенсәлекле стилләштереп, уға уңышлы заман хореографияһы элементтарын өҫтәүе менән билдәле. Улар Себерҙең бәләкәй халыҡтарының милли композицияларын да башҡара, шор, телеут һәм башҡа халыҡтарҙың бейеү материалы ошо ансамбль арҡаһында һаҡланып килә. "Аллегро" ансамбле репертуарының нигеҙендә XX-XXI быуат композиторҙары музыкаһы, шулай уҡ ҡалмыҡ халыҡ моңдарына заманса интерпретация һәм ҡалмыҡ авторҙары әҫәрҙәре ята. Башҡортостанды беҙҙең "Мираҫ" ансамбле күрһәтте. Беҙҙең репертуарға күберәк башҡорттоң милли музыка ҡоралы ҡурай, башҡорт бейеүҙәре һәм йырҙарынан торған номерҙар индерелгәйне.

Ҡайҙа йөрөһәк тә, бигерәк тә сит илдәргә сыҡҡанда, үҙебеҙҙең боронғо халыҡ йырҙарын башҡарабыҙ. Сочиға йырсыларҙан мин һәм Салауат Мөхәмәтйәров барҙы, ул "Уйыл", "Томан"ды, мин "Әлмәлек"те йырланым, шунан икәүләшеп ҡурайға ҡушылып "Хан ҡыҙы"н башҡарҙыҡ. Илшат Солтангәрәевтың ҡурайҙа уйнауын да, бейеү коллективының бейеүҙәрен дә халыҡ таң ҡалып ҡараны. Донъяла бына шундай гүзәл мәҙәниәтле, матур күңелле халыҡ бар икәнлеген танытып, күп йөрөһәк тә, башҡорттарҙы әле һаман да белеп бөтмәйҙәр. Белгәне лә, артта ҡалған, технологиялар булмаған бер төбәктә йәшәйбеҙ икән, тип уйлай. Шуға ла Өфө ҡала округы хакимиәте етәкселәренең "Мираҫ"тың сит илгә гастролдәрен ойоштороу мөмкинлеге табыуын бик яҡшы эш, тип баһалайым. Нимә генә тиһәк тә, ситтәргә үҙебеҙ тураһында белдереү ҙә изге ғәмәл. Концерттан һуң костюмдарыбыҙҙы тотоп ҡарарға, беҙҙең менән фотоға төшөргә теләүсе тамашасылар һәр ваҡыт күп була. Был саранан алда Төркиәлә булып ҡайтырға тура килде. Стамбулдағы һабантуйҙа ла ҡатнаштыҡ. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге паркты, шулай уҡ бөйөк ғалимдың бюсын асыу тантанаһында булдыҡ. Был сарала бөтөн төрки донъяһының Әхмәтзәки Вәлидигә булған ихтирамын күрҙем һәм милләттәшем өсөн оло ғорурлыҡ тойғолары кисерҙем.

Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.

✓ *Бер көндө сираттағы эскелектән һуң уның менән шундай мөғжизә була: үҙ ғүмерендә бер доға ла белмәгән, намаҙ уҡып та ҡарамаған кеше сәждәгә китеп, ҡысҡырып доғалар уҡый башлай.*

ИНТЕРНЕТТАН

БЫЛ ДОНЪЯҒА...

оптимист булып тыуабыҙ

■ Йоҡлауҙың иң мөһим маҡсаты булып энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу тора, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Бактиһән, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм кәүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағансы, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ. Ә ҡышҡыһын йоҡоға талыусы йәнлектәр һаҡлап ҡалған энергия уларға йылыраҡ яҡтарға барып етергә лә етә, имеш.

■ Артыҡ ауырлыҡ, ғәҙәттә, атайҙан улға, әсәйҙән ҡыҙға нәҫел буйынса бирелә икән. Был турала АҠШ-тың Плимут медицина мәктәбе хәбәр итә. Улар 226 Америка ғаиләһен тикшереп, тулы кәүҙәле әсәйҙәрҙең ҡыҙҙары артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфа сигеүен асыҡлаған. Артыҡ ауырлыҡ малайҙарға атайҙарҙан күсә. Артыҡ ауырлыҡтың тәүге билдәләре бала саҡта уҡ күренә башлай, мәҫәлән, һигеҙ йәшлек ҡыҙҙар тиҫтерҙәренә ҡарағанда тулыраҡ була.

■ Кешенең тәбиғәте менән оптимист булыуын АҠШ-тың Канзас штаты Университеты асыҡлаған. Был тикшеренеүҙә донъяның 140 илендә йәшәүсе халыҡ ҡатнаша. Яуап биреүселәрҙең 95 проценты тик ыңғай ваҡиғалар көтөп йәшәй һәм был, ғалимдар фекеренсә, "универсаль оптимизм теорияһы"н таҙы ла бер раҫлай. Был теория буйынса, һәр кеше алдағы көндәргә ышаныс менән ҡарай.

■ Яҡшы кәйеф һыуыҡ тейеүҙән һаҡлай. Дуҫтарың менән күңел асҡан, яратҡан эшең менән шөғөлләнгән, башкөлләй эшкә сумған саҡта һин үҙеңдең иммун системаңды ике көнгә етерлек итеп нығытаһың. Ә насар кәйефтән һуң иммунитет ике тәүлеккә ҡаҡшай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һау кеше насар кәйефтә урамға сыҡһа, шунда уҡ һыуыҡ тейҙереп, ауырып китә ала.

■ Йөрәк ауырыуҙарынан, шул иҫәптән, инсульттан һаҡланам тиһәгеҙ, өйҙә ултырмағыҙ, ә күберәк сәйәхәт итегеҙ. Канаданың Торонто университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ғүмере буйы бер ҡалала ғына йәшәүселәргә ҡарағанда, йәшәү урынын алыштырырға яратыусылар араһында инсульт кисереүселәр 30 процентҡа һирәгерәк осрай. Сәйәхәт яратыусылар ҙа йөрәк сирҙәренә бирешеп бармай икән.

■ Табип-психиатр, Лос-Анджелесс университеты профессоры Роджер Джеломми кәңәш итеүенсә, бер минут ултырып торорға ла ваҡытығыҙ юҡ икән, эшләргә тейешле эштәрегеҙҙән исемлек төҙөгөҙ һәм уны яртыһына тиклем ҡыҫҡартығыҙ. Психологтар шулай уҡ арып киткәнлекте тойоу менән кисен телевизорҙан яңылыҡтар урынына тәмле итеп ашарға бешерергә өйрәтеүсе тапшырыуҙар ҡарарға ҡуша. Бындай "дауа"ны бер аҙна тирәһе ҡулланһағыҙ, күңелегеҙҙә йәшәүгә дәрт уянып китеүен үҙегеҙ ҙә һиҙерһегеҙ. Калифорнияның Беркли университетының тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Америк Азеведо фекеренсә, кеше үҙен замандың һәр бер яңы техникаһы менән уратып алырға тырыша, шуға ла ҡайһы бер саҡта машинаһыҙ, телефонһыҙ, музыка тыңламай ғына йәйәүләп йөрөп алыу ҙа арыу тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

Балалар һәм үҫмерҙәр һаулығының торошо - ул йәмғиәт һәм дәүләт именлегенең мөһим күрһәткесе, тиҙәр. Үҫеп килеүсе быуынды хәстәрләү, уларҙың сәләмәтлеген нығытыу һәм һаҡлау - дәүләт сәйәсәтенең өҫтөнлөклө йүнәлеше булһа ла, баланың үҙенең сәләмәтлегенә булған дөрөҫ ҡарашы әле ул бәләкәй саҡта уҡ формалаша. Бының өсөн ата-әсәләр нимәгә иғтибар итергә тейеш? Бөгөн балаларҙың һаулығы ниндәй кимәлдә? Ниндәй сәбәп менән балалар һаулығының күрһәткестәре йылдан-йыл түбәнәйә? Яңы уҡыу йылы башланған мәлдә ошо һәм башҡа һорауҙарға Өфө район поликлиникаһының балалар психиатры Рәмилә Ғүмәр ҡыҙы ӘБДЕЛҒУЖИНА менән яуап эҙләйбеҙ.

БОШМАҪҺЫҢ, ТИП ӘРЛӘМӘ,

тимәк, баланың нервылары тыныс

Дөрөҫ туҡланыу һәм спорт

Бөгөнгө көндә балалар һәм үҫмерҙәр араһында иң киң таралғаны - тын юлдары ауырыуҙары. Киҫкен респиратор-вируслы инфекциялар (ОРВИ), киҫкен респираторлы ауырыуҙар (ОРЗ), фарингит, синусит, ангина, отит - был ауырыуҙарҙы 95 процент осраҡта вирустар тыуҙыра. Был ауырыуҙар йылдың һалҡын осоронда йышыраҡ осрай, шуға ла уларҙы булдырмаҫ өсөн өҫкә һәм аяҡҡа йылы итеп кейеп йөрөргә кәрәк. Йәштәр мода артынан ҡыуып, яланбаш йөрөргә ғәҙәтләнеп алды, был да бик зыянлы. Шулай уҡ үҫмер ҡыҙҙар билдәрен яҡшылап ябып еткермәгән кейем кеймәһен ине. Түллек биҙенә һалҡын тейһә, унда шешеү процесы башлана, бының күңелһеҙ эҙемтәләрен аҙаҡтан, әсәй булыу ваҡыты еткәс кенә татыясаҡ ҡыҙ бала. Шуға ла ҡыҙҙарығыҙҙы бәләкәйҙән үк әсәй итеп тәрбиәләргә, буласаҡ балалары алдында яуаплылыҡ тойорға өйрәтеп үҫтерергә кәрәк.

Икенсе урында ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары килә. Был төркөм сирҙәрҙең барлыҡҡа килеүенең нигеҙендә күбеһенсә дөрөҫ туҡланмау ята. Иртәнге аш өсөн ваҡыт бүлеү, тимәк, үҙеңдең сәләмәтлегең тураһында хәстәрлек күреү ул. Иртән ашамай, ҡабаланып сәй генә эсеп киткән баланың ашҡаҙан аҫты биҙе бүлеп сығарған һелте үҙенең ашҡаҙанын "ашай", һөҙөмтәлә ашҡаҙанда сейле яралар барлыҡҡа килә. Баланың туҡланыуы һәйбәт булһа, аҙыҡ менән витаминдарҙы етерлек алһа, иммунитеты ла көслө була, киҙеү кеүек миҙгел ауырыуҙарына ла бирешеп бармай. Уҡыусыларҙың рационында һоло бутҡаһы мотлаҡ булһын, магазинда уларҙаң төрлөләре, биш минут эсендә генә бешереп ала торғандары бар. **Ә бына төрлө консерванттар, мәҫәлән, емешеләк ҡатыштырып эшләнгән һәм эҫе һыуға ғына болғап ашарға тәҡдим ителгәндәрен ҡулланырға кәңәш итмәйем, сөнки унда тәм биреүсе матдәләр, стабилизаторҙар, буяуҙар күберәк булыуы ихтимал.**

Чипсы ашаған балаларҙың эсәк, ашҡаҙаны ауырыу була. Кока-кола эсә икән, һөйәгенән кальций йыуылып сыға һәм һөйәктәр мурттка әйләнә. Шулай уҡ иртәнге аш ваҡытында йоморттка, һары май, сыр, эремсек ашатырға була. Мәктәп уҡыусыһына шәкәрләп сәй эсергә мөмкин, сөнки шәкәр организмға энергия бирә. Беҙ хәҙер шәкәргә һағыраҡ ҡарайбыҙ, әммә уҡыған саҡта баш мейеһен туҡландырыу өсөн глюкоза кәрәк.

Өсөнсө урынды хәрәкәт-таяныу аппараты сирҙәре алып тора. Уларҙы булдырмау өсөн парта, компьютер артында кәкерәйеп ултырырға ярамай. Шулай уҡ спорт менән дуҫ булыу, турникта ике ҡул менән тотоноп тороу яҡшы.

Нервылар һау булһа…

Һуңғы ваҡытта балалар араһында психик сирҙәр күбәйә. Быға интернетта тәүлектәр буйына ултырыу, режимдың булмауы һөҙөмтәһендә нервылар ҡаҡшауы сәбәпсе. Психосоматик ауырыуҙар: ҡурылдай астмаһы, шәкәр диабеты, гипертоник сирҙәр, шулай уҡ ашҡаҙан, эсәктең сей яралары ла нервыларҙың һау булмауынан.

Халҡыбыҙҙы, бошмаҫ, тип, холҡобоҙҙағы был сифатты кире сифаттар рәтенә ҡуйһалар ҙа, мин уны насар күренеш тип ҡабул итмәйем. Эш тәжрибәмдән сығып әйтәм, артыҡ бошоп бармаған балалар ауырыуҙарға ла бирешмәй, тимәк, уның нервылары ла, сәләмәтлеге лә ныҡ, тигән һүҙ. Шуға ла ата-әсәләр балаларын аҡрын, иғтибарһыҙ булыуҙа ғәйепләп, көйөнөп бармауын бошмаҫлыҡҡа япһарып, әрләмәһен ине.

Ҡояш байығанда йоҡларға ятып, ҡояш менән торған кешеләр бәхетле, тип тә әйтәләр. Режим һаҡлау ололарға ла, балаларға ла бик мөһим. Үҫеү гормонының ҙур өлөшө йоҡлаған саҡта бүленә, шуға ла бала төндә ни тиклем күберәк йоҡлай, ул шул тиклем яҡшыраҡ үҫәсәк. Гөмүмән, башҡа гормондар ҙа, мәҫәлән, эндорфиндар йоҡлағанда бүленә. Әгәр ҙә беҙ һуң ятабыҙ икән, үҙебеҙҙе ошо гормондарҙан мәхрүм итәбеҙ. Бының яйлап депрессияға килтереү бар.

Балаңа дуҫ бул

Мине тағы ла хафаға һалған нәмәләрҙең береһе - уҡыусы балаларҙың компьютер уйындары менән артыҡ мауығыуы. Хәҙерге ваҡытта был ғилми рәүештә иҫбатланған - компьютер уйындары наркотиктарға ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ. Наркоманды дауалап булһа ла, компьютер уйындарына бәйлелекте дауалауы ауыр, ти белгестәр. Һөҙөмтәлә психикаһы формалашып бөтмәгән баланың фекерләүе, донъяға ҡарашы үҙгәрә, улар бик агрессивҡа әйләнә, йәлләү тойғоһон юғалта. Ысын тормош менән виртуаль тормош араһындағы сиктәрҙе тоймай башлаған балаға хатта ауыр енәйәт ҡылыуы ла бер нимә тормауы мөмкин. Ата-әсәләргә, мөмкинлектәре булһа, бәләкәй балаларҙы бындай уйындарға күнектермәҫкә, өйрәнгәндәрен яйлап тыйырға кәрәк. Шулай өлкән синыф уҡыусыларының компьютер артында ултырыу ваҡытын кәметеү уларҙың ҡулынан килгән эш. Физик күнекмәләр, урамда уйындар уйнау, саф һауала йөрөү, ғаилә менән саңғыға баҫыу балаларҙы компьютер ҡоллоғонан ҡоткара ала. Китап уҡығанда ла ял минуттары ойоштороуҙы онотмағыҙ, юғиһә, гел хәрефтәргә текәлеп ултырыуҙан күрәшлек барлыҡҡа килә. Икенсенән, тороп йөрөп алһаң, ҡан әйләнеше лә яҡшырып китә. Күҙҙәр өсөн гимнастиканың иң ябай төрө шунан ғибәрәт. Бала тәҙрә янына баҫһын да, бер алыҫтағы предметҡа, бер яҡындағыһына ҡараһын.

Иң мөһиме, мәктәптән ҡайтҡан баланы ата-әсә көн оҙонона яңғыҙын ҡалдырмаһын ине. Атай менән әсәй балалар менән ни тиклем яҡшы, яҡын мөнәсәбәттә була, шул тиклем уның нимә менән йәшәүен, кемдәр менән аралашыуын яҡшыраҡ белә. Рухһыҙлыҡтан, бергә театр, мәсеттәргә йөрөмәүҙән, хатта ата-әсәһенең иғтибарын, һөйөүен тоймауҙан бала үҙенең ваҡытын дөрөҫ файҙалана алмай, боҙоҡ юлға баҫыуы, спиртлы эсемлектәр эскән, тәмәке тартҡан ҡыҙҙар-егеттәр менән дуҫлашып китеүе бар - ошоно иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Һәр ата-әсә балаһының сәләмәт булыуын теләй, әлбиттә. Әммә бында теләк булыуы ғына аҙ, баланың тәне ныҡ һәм рухы сәләмәт булһын өсөн өйҙә шарттар тыуҙырыу кәрәк. Ғаилә ағзалары араһындағы яғымлы мөнәсәбәт, дөрөҫ төҙөлгән көн режимы, яҡшы итеп туҡланыу, шәхси гигиена ҡағиҙәләрен тотоу, баланы аңлау һәм ауыр ваҡытта уға ярҙамға килергә әҙер булыу - ябай һәм артыҡ ҡатмарлы булмаған был талаптарҙы үтәү бөтәбеҙҙең дә ҡулынан килә торған эш. Ә был хеҙмәттең һөҙөмтәһе - сәләмәт бала, тимәк, уның мәктәптә уңышлы уҡыуы, сифатлы белем алыуы, киләсәктә яратҡан эшендә үҙен табыуы ул.

Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

"АЛЛАҺ" ИСЕМЕ...

күкрәгенә яҙылған

Йәйгеһен беҙҙең Сибай ҡалаһының "Тәҡүә" мәсетендә шундай бер мөғжизә булды. Ул хаҡта халыҡҡа бәйән итке килә.

Бынан өс йыл элек Әбйәлил районынан беҙҙең "Тәҡүә" мәсетенә бер егет килеп, өшкөрөлөп киткәйне. Үҙе һөйләүенсә, шунан һуң уның юлындағы кәртәләр алынып, тормошо алға китә. Ул Сибай институтында уҡып йөрөгән бер матур ҡыҙға өйләнә, балалары тыуа. Әммә күп тә үтмәй, дуҫтарына эйәреп, егет эскеләй башлай. Бер көндө сираттағы эскелектән һуң уның менән шундай мөғжизә була: үҙ ғүмерендә бер доға ла белмәгән, намаҙ уҡып та ҡарамаған кеше сәждәгә китеп, ҡысҡырып доғалар уҡый башлай. Был хикмәттән ни эшләргә белмәй баҙап ҡалған ҡатыны тиҙ генә күршеләрен саҡырып индерә. "Ирем ҡапыл ғына аят уҡый башланысы. Әлифте таяҡ тип белмәй торғайны ла баһа", - тип аптырай ҡатыны. Сәждә ваҡытында ирҙең түшен ниҙер әсеттереп сыйып киткәндәй тойола. Ул урынынан тороп, түшен

ТӘБИҒӘТ СЕРҘӘРЕ

АРТЫШ, КИПАРИС...

һәм боронғо гректар менән башҡорттар

Артыш беҙҙең республиканың Белорет, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Ғафури, Ейәнсура һәм башҡа таулы райондарында ылыҫлы урмандарҙа, тау битләүҙәрендә, ҡомло йәки ваҡ ташлы урындарҙа үҫә. Ваҡ ташлы тупраҡтарҙа ул ергә ятып, ә ҡомло урындарҙа, мәҫәлән, Марий Эл республикаһында тура олонло булып үҫә. Бейеклеге 1-3 м булған был үҫемлектең олондары ҡара һоро, ә йәш ботаҡтары ҡыҙғылт һоро төҫтә була. Артыштың 10-16 мм оҙонлоҡтағы тар ланцет япраҡтары энәне хәтерләтә, ҡышҡылыҡҡа ҡойолмай.

Ғалимдар артыштың ергә ятып үҫкән төрөн "можжевельник казацкий", ә ҡыуаҡ формаһында тура үҫкәндәрен "можжевельник обыкновенный" тип йөрөтә. Артыш (Можжевельник - Juniperus L.) кипаристар ғаиләһенә ҡараған ике өйлө ҡыуаҡ үҫемлек. Үҫемлектәрҙең береһендә - тик ата сәскәләр, ә икенсеһендә инә сәскәләр урынлашҡан. Ата сәскәләре оҙонса һырғаны хәтерләтә. Инә сәскәләренең йәшел тубырсыҡтарында 8-10 рәттән торған тәңкәләре була. Уларҙың өҫкө рәте емеш бирә. Аталанғандан һуң тәңкәләрҙең һәр береһе ҙурайып үҫеп китә һәм емеше еләккә оҡшаған тубырсыҡ барлыҡҡа килтерә. Был емештәр тик икенсе йылға ғына өлгөрөп етә. Тәүге йыл улар йәшел, ә икенсе йыл күкһел ҡара төҫтә була. Уларҙың ҙурлығы 6-10 миллиметр диаметрлы шар йәки эллипс формаһында була.

Артыштың тубырсыҡтарын тамам өлгөрөп еткәс кенә йыялар. Улар, ғәҙәттә, сентябрь айында өлгөрә. Япраҡтары сәнскеле булыу сәбәпле, артыштың еләктәрен йыйыу эше бер аҙ ҡатмарлаша. Ләкин ҡыуаҡ аҫтына брезент йәйеп, уны һелкһәң, был эш байтаҡҡа еңелләшә, еләктәр үҫҙәре үк ҡойолоп төшә. Артыш еләген киптерер алдынан ҡоро ботаҡтарҙан, йәшел еләктәрҙән айырып алырға кәрәк. Уны махсус киптергестәрҙә йәки температура артыҡ юғары булмаған йылы бинала киптерәләр. Һәйбәт киптерелгән еләк ҡара төҫтә, йомро формала булырға тейеш. Киптереү процесы оҙаҡ бара. Шуға күрә уны йыш әйләндереп торорға кәрәк.

Артыш көслө фитонцид үҫемлектәрҙән һанала. Уның бер гектар ҡыуағы 30 килограмм фитонцид матдә бүлеп сығара. Был ҡәҙәр фитонцид миллион тирәһе халҡы булған ҙур бер ҡаланы бактерияларҙан таҙартыу өсөн етерлек. Ошо үҫемлектең һәм уның ҡәрҙәштәренең һауаны таҙартыу сифаты хатта боронғо мифтарҙа һәм легендаларҙа һаҡланып ҡалған. Мәйет сығҡан өйҙә артыш менән ыҫлау ғәҙәте булырға тейеш. Артышты шулай уҡ һәр өйҙәң ишек башына йә өй мөйөшөнә ҡыҫтырып ҡуйыу, йәғни был йортто төрлө яманлыҡтарҙан һаҡларға тырышыу, элек-электән килгән йола. Хәҙер ҙә грипп киҙеүе ҡоторған осорҙа күп ауылдарҙа өйҙә артыш яндырып ыҫлап алалар.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был йолалар боронғо гректарҙа ла күҙәтелгән һәм легендаларында һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, кипарис тураһындағы легендала былай тип һөйләнелә (кипарис - артыш менән бер ғаиләгә ҡараған мәңге йәшел ылыҫ япраҡлы үҫемлек):

...Кеос утрауындағы Карфей үҙәнендә алтын мөгөҙлө үтә нәфис болан йәшәгән, ти. Уның муйынын гәүһәр муйынсаҡ, ҡолаҡтарын үтә ҡиммәтле һырғалар биҙәп торған. Кешеләр араһында үҫкәнгә күрә, ул бер кемдән дә ҡурҡмаған. Был боланды барыһы ла яратҡан. Кем нисек теләй, шулай иркәләгән. Әммә утрау батшаһының улы Кипарис уны айырыуса ныҡ яратҡан була. Ул болан менән бергә тауҙар, туғайҙар буйлап гиҙгән. Боланды төрлө тәм-том, үләндәр менән һыйлаған, көмөш һыулы шишмәләрҙән һыу эсергән, мөгөҙөн төрлө сәскәләрҙән үрелгән гөлләмәләр менән биҙәгән. Ҡайһы саҡта ул боланға атланып алып, Карфей үҙәне буйлап сәйәхәткә сығып китер булған.

...Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә был алтын мөгөҙлө болан ҡыуаҡтар күләгәһе ышығына ял итергә ята. Осраҡлы рәүештә ошонда уҡ Кипарис һунар итеп йөрөгән була. Ҡыуаҡ төбөндә ятҡан боланды күреп ҡала һәм уны үткер һөңгөһө менән сәнсеп үлтерә. Әлбиттә, ул үҙенең яратҡан боланын һәләк иткәнен белмәй, сөнки ул яртылаш япраҡтар менән күмелгән була. Тик табышына яҡынлашҡас ҡына Кипарис үҙенең ниндәй хата эшләгәнен аңлай. Кипарис һис кисекмәҫтән боланы менән бергә үлергә теләй. Аполлондың уны йыуатырға теләүе юҡҡа ғына була. Ул аллаларҙан үҙен мәңгелеккә ҡайғыға дусар итеүҙәрен һорай. Аполлон, үҫмер егеттең теләгән үтәп, уның кәүҙәһен ағаҫҡа әүерелдерә. Уны ҡайырылар менән ҡаплап ҡуйып, йәшел төҫлө ылыҫтар менән биҙәй. Һомғол буйы менән күккә ынтылған был мәңге йәшел ағаҫҡа ҡарап, Аполлон былай ти:

-Мин һинең өсөн, үҫмер егет, һәр ваҡыт ҡайғы кисерермен һәм һин дә һәр саҡ шулай кеше ҡайғыһы өсөн ғазап сигерһең. Бына шулай мәңге ҡайғырып йәшә!

Шул ваҡыттан алып гректар, өйҙәрендә мәйет булһа, кипарис ботаҡтары элеп ҡуйыр, ҡәберҙәргә кипарис ағасы ултыртыр булған... Был риүәйәткә бәйлеме, юҡмы, әммә башҡорттар элек-электән артышты шулай уҡ кипарис ағасы кеүек изге күрә һәм бер үк маҡсатта ҡуллана.

Тура үҫкән артышты Ҡыраҡа тауҙарында (Белорет районы) осратырға була. Ул матурлығы, һомғол булыуы менән кипаристан берҙә генә ҡалышмай. БДУ-ның Сибай институты ғалимдары һуңғы йылдарҙа артышты морфологик, генетик яҡтан ныҡлап өйрәнеү менән шөғөлләнә. Хәйбулла районы Урыҫбай ауылы янында олоно 13-14 см булған 45-60° текә үҫкән артыш ҡыуаҡлығы иғтибарҙы йәлеп итә. Биология фәндәре докторы, профессор Юлай Янбаев етәкселегендәге төркөм генетик тикшереүҙәр үткәреп, уның айырым төр түгел, ә осраҡлы үҙгәртеү кисергән клон булыуын иҫбат итте. Һуңғы йылдарҙа Бөрйән районында тура үҫеүсе артыштарҙан ғына торған ҙур майҙандар булғанлығы билдәле булды. Артышты ҡалаларҙы, бигерәк тә шифаханалар тирәләрен йәшелләндереү өсөн ултыртыу ифрат файҙалы. Грециялa, Румынияла, Болгарияла артыш ҡыуаҡтарын ҡалаларҙы биҙәү өсөн киң ҡулланалар.

Әйткәндәй, артыш менән ыҫланған ҡымыҙ мискәләре ҡымыҙға үҙенсәлекле тәм бирә. Уны шулай уҡ ит ыҫлау өсөн дә ҡулланалар.

Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,
биология фәндәре докторы.

асып ҡарай: уның йөрәге тапҡырында "Аллаһ" тигән һүҙ яҙылған була. Бөтә күрше-тирәһе, ҡатыны, ир үҙе лә был хәлгә бик ныҡ аптырай. Оҙаҡҡа һуҙмайынса, тиҙ генә йыйыналар ҙа, Сибайға, теге саҡ өшкөрөлөргә килгән "Тәҡүә" мәсетенә йүнәләләр.

Ирҙең түшендәге "Аллаһ" яҙыуын күргәс, күҙҙәремдән йәш атылып сыҡты. Эй, Раббым, күрһәткән мөғжизәләреңә мең дә мең шөкөр, тинем. Был уникаль хәлде тиҙ генә фотоға төшөрөп алдыҡ һәм йәш иргә мәсеттәгеләр менән бергәләп, күмәкләп ошоларҙы әйттек: "Был юҡҡа түгел, һиңә Аллаһы Тәғәләбеҙ үҙенең көҙрәтен күрһәткән. Йөрәгеңә "Аллаһ" тип яҙып ҡуйған. Тимәк, һин - Аллаһыбыҙҙың һайланмыш бәндәһе. Дин тотоп, намыҫлы йәшәргә тейешһең. Аҡыл-зиһен нурын һүндереүгә, кешенең ихтыяр көсөн юғалтып, күркәм әхлаҡҡа зыян килтереүгә йүнәлтелгән хәрәм ризыҡтар ҡулланыуҙан тыйыл".

Был ирҙең түшендәге яҙыуҙы күргән бер кеше шуны аңлаһын ине: "Аллаһ" исеме беҙҙең барыбыҙҙың да йөрәктәребеҙгә, устарыбыҙға яҙылған. Ул бөтә ғаләмде, шулай уҡ беҙҙе лә яралтҡан бөйөк зат. Беҙгә, әҙәм балаларына, Аллаһтың барлығын белеп, уға ғибәҙәт ҡылып, зекерҙәр әйтеп, Ҡөрьән ҡушҡанды үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәргә насип итһен. Амин.

Лоҡман хажи ҒӘБИТОВ.
Сибай ҡалаһы "Тәҡүә" мәсете.

УҢЫШ ҠАҘАН

ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

Оҙаҡ йәшәү серҙәре

Үҙегеҙҙе ҡарт тип иҫәпләүҙән тыйылығыҙ

Һынығыҙға деградацияға бирелергә юл ҡуймағыҙ. Ҡарттарҙың һыны физик сәләмәтлеккә лә, рухи сәләмәтлеккә лә берҙәй кире йоғонто яһай.

Физик торош күҙлегенән ҡарағанда, көмөрөлөк арҡаның аҫҡы өлөшөнә көсөргәнеш килтерә һәм, раҫланыуынса, ҡан әйләнешенә һәм тын алыу юлдарына тәьҫир итә. Насар һын кешелә арығанлыҡ тойғоһо тыуҙыра һәм уның ижади дәртен кәметә. Һеҙ нисек баҫып тораһығыҙ, хәрәкәт итәһегеҙ, нимәлер эшләйһегеҙ - былар барыһы ла тотош торошоғоҙға йоғонто яһай (ҡулбаштарығыҙҙы көсөргәнештән арындырып, ҡысҡырып көлгән ваҡытта үҙегеҙҙе арыған һәм күңелһеҙ итеп тойоп ҡарағыҙ). Уильям Джемс әйтмешләй: "Беҙ бәхетле булған өсөн көлмәйбеҙ, ә тап көлгән өсөн бәхетлебеҙ".

Шуға күрә арҡағыҙҙы - тура, башығыҙҙы мөмкин тиклем юғарыраҡ тотоғоҙ. Дәртле, йомшаҡ, ныҡлы аҙымдар менән атлағыҙ. Атлағанда тәрән һәм тигеҙ итеп тын алығыҙ. Матур һын - ул шундай нәмә, уны даими тойорға һәм ғәҙәт итеп алырға кәрәк. Сәләмәтлек өсөн дөрөҫ һын һәм тын алыу биргән уңыш - баһалап бөткөһөҙ.

Һоҡланғыс сәләмәтлеккә эйә булырға теләүселәр өсөн тағы бер кәңәш: көнөнә икеөс тапҡыр күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм физик яҡтан ниндәй булырға теләйһегеҙ, үҙегеҙҙе шундай итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Уның йөҙөнән, күҙҙәренән түгелгән яҡтылыҡты ентекләп ҡарағыҙ, тиреһенең шымалығына һәм мускулдарының ҡатылығына иғтибар итегеҙ. Үҙегеҙҙе көлөп тороусы итеп күҙаллағыҙ һәм әле генә һеҙгә тулған энергияны тойоғоҙ. Әлеге мәлдә һеҙ уйығыҙҙа ғына картиналар төҙөү буйынса белгес булып тораһығыҙ һәм тәҡдим ителгән ысулдың сикһеҙ ҡеүәтен тормошҡа ашыра белергә тейешһегеҙ. Бер ай дауамында көн һайын хыялығыҙҙа киләсәктә үҙегеҙгә кәрәкле картиналарҙы төшөрөгөҙ һәм һиҙелерлек үҙгәрештәр күрерһегеҙ. Үҙбаһағыҙ һиҙелерлек үҫәсәк, үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тоясаҡһығыҙ, физик камиллыҡҡа алып барасаҡ көндәлек күнекмәләрҙе эшләү өсөн ижади дәртегеҙ артасаҡ.

Маҡсатығыҙҙы даими рәүештә күҙ алдығыҙҙа тотоп, уны теләк, дәрт менән, уның ысынбарлыҡ буласағына ныҡлы ышаныс менән нығытҡанда, бөтөн нәмәгә өлгәшергә мөмкин. Был исемлеккә тағы ла хис-тойғоларҙы, маҡсатығыҙға өлгәшергә тейешле аныҡ ваҡыт сиктәрен, аныҡ план һәм хыялығыҙға табан алып барыусы көндәлек план графигын да өҫтәһәгеҙ, һеҙҙе бер кем дә туҡтата алмаҫ. Бер ҡасан да танауығыҙҙы төшөрөп, ҡулығыҙҙы һелтәп ҡуймағыҙ. Һеҙ - көслө характерлы һәм ҡаһарман кеше, бары тик көсһеҙҙәр генә "Тормош камиллығы һәм ныҡлы сәләмәтлек" тигән тауға үрләгәндә артҡа борола. Тормоштоң иң ҙур ҡаҙаныштары артынан барғанда һеҙҙе ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс мажаралар ғына түгел, матур һөҙөмтәләр ҙә көтә. Һәм былар барыһы ла һеҙҙең ҡулығыҙҙан килә!

Робин ШАРМА.



10 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Сердце Марии", 44-я серия (16+)
13.20 "Время обедать!"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "ЖКХ" (12+)
16.15 "Пока все дома" (12+)
17.00 "Хранимые судьбой", 5-я серия (12+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Подземный переход, 1-я и 2-я серии. Сериал (16+)
23.30 Ночные новости
23.50 "Без свидетелей", 6-я серия. Сериал (16+)
00.20 "Борджиа" (18+)
01.20, 03.05 "Сломанная стрела". Боевик
03.00 Новости
03.25 "Детройт" 1-8-7) (16+)
04.15 "Контрольная закупка"

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал(12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Без следа", 7-я и 8-я серии. Детективный сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Земский доктор. Продолжение", 13-я и 14-я серии. Мелодрама (12+)
00.15 "Девчата" (12+)
00.50 "Вести+"
01.10 "Обменяли хулигана на Луиса Корвалана..."
02.15 "Сыновья". Драма (16+)
04.25 "Городок. Дайджест"

НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!" (0+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Морские дьяволы". "Зверь". Сериал (16+)
